ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

6-12 март (буранай) 2021
№ 10 (948)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Улым, һиңә әйтәм, йәки Гүзәлдәребеҙҙе ҡыйырһытмайыҡ! 2-3



Ҡурҡмай тотон... икенсе бейеклекте яулауға! 8-9



Күңел дауаһы өләшкән... ҡот һәм бәрәкәт бит улар 11



Мыжымайбыҙ, йыбанмайбыҙ, үсекмәйбеҙ... һәм алға, тик алға! 12-13



ТВ-программа 14

*ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ*

## ҺӘР БЕРЕҺЕ - ГҮЗӘЛЛЕКТЕҢ ҮҘЕ!

Был тормошта бер ваҡытта ла үҙгәрмәй торған ҡиммәттәр була. Шуларҙың төүгеһе һәм иң мөһиме - ул Ҡатын-ҡыҙ, Әсә тигән бөйөк төшөнсәләргә ҡарата оло ихтирам. Миненсә, был донъяла һәр кеше, төү сиратта, үҙ әсәһенә рәхмәтле булырға тейештер. Ни өсөн? Хатта ғүмер буйына иткәне өсөн генә лә беҙ уларҙы ҡәҙерләргә һәм хөрмәт итергә, мәҙхиә һүҙен ваҡытында әйтергә бурыслыбыҙ. Мин дә әсәйемә миңә ғүмер биргәне өсөн сикһеҙ рәхмәтлемен. Уның һаман да минең өсөн, минең ғаиләм өсөн борсолоп тороуын беләм. Бер азымым да уның фатихаһынан тыш эшләнмәй. Мөһим эштәремә тотонор алдынан мотлаҡ уның менән кәңәшләшергә тырышам, сөнки беләм, бар хыялдарым, бар уйҙарым уның ризалығы менән тормошҡа ашырыла.

Ғаиләлә дүрт бала үҫтек. Апайым менән һеңлем ҡустым менән минең өсөн өҙөлөп тора. Бәләкәйҙән беҙҙе хәстәрләп, әсәйемә бар яҡлап ярҙам итергә тырыштылар. Шулай үҫтек. Әллә ҡасан балалыҡтан сыҡһаҡ та, был тормошта кем генә булып китһәк тә, әсәйҙәребеҙ өсөн беҙ һәр саҡ сабый бала булып ҡалабыҙҙыр ул, балаларын ҡайғыртып тороуҙан улар бер ваҡытта ла туҡтамай бит...

Өләсәйем Рабиға тураһында күңелемдә йылы хәтирәләр йөрөтәм. Ул минең өсөн ысын ағинәй өлгөһө булып ҡала. Тоғролоҡ, кешелеклелек, олоно ололау, кесене кеселәү кеүек мөһим сифаттарҙы миндә бала саҡтан ул тәрбиәләне. Изгелеккә өндәне. Арабыҙҙа күптән булмаһа ла, көслө рухын һаман да тоям, ул өйрәткән ябай төшөнсәләргә таянам, уның аша үҙемә туғанлыҡ хистәрен бар тәрәнлегендә һеңдергәнемде беләм.

Ҡатыным - минең яҡын дуҫым да, ышаныслы терәгем дә һәм ҡайнар мөхәббәтем дә. Мине бар яҡлап хуплап, дәртләндереп торорға көс тә, ваҡыт та таба.

Улым менән бергә йөнәш үҫеп килгән бер ҡыҙ балаға атай булыуым менән дә сикһеҙ бәхетлемен. Уны, әлбиттә, ныҡ яратам. Артыҡ иркәләмәйемме икән, тип уйлап, әҙерәк шикләнеп тә ҡуям.

Ҡыҙым, ҡатыным, апайым, һеңлем, әсәйем, өләсәйем... Минең өсөн уларҙың һәр береһе - гүзәллектең үҙе.

**Рәмзил ИШҺАРИН,**
**РФ Дәүләт Думаһы депутаты.**

*ҺҮҘ - ҮҘЕНӘ*

## ӘСӘЙ ҘӘ УЛ!

Ҡатын-ҡыҙҙың әсәй булыуы хаҡында әйтер һүҙем. Әлеге мәлдә өлкән улым Искәндәр Себерҙә, бәләкәсем Уралым Санкт-Петербургта эшләп йөрөй. Бөгөн уртансы улым Марат килеп урамымдағы ҡарҙы көрәп китте. Шул тиклем ҡыуандым! Аллаға шөкөр, балаларым менән геү килеп, әсәйем әйтмешләй, өрөлтөп донъя көтәбеҙ. Килендәрем менән дә ныҡ татыумын. Улар минең, мин уларҙың серҙәштәре, дуҫы. Осрашһаҡ, сөкөрҙәгә сығабыҙ. Уландарым, мoғайын, ҡатын эҙләгәндә әсәһенә оҡшағанды һайлағандыр. Шуға ла килендәрем үҙем кеүек бик алсаҡ, ихлас, эскерһеҙ.

Әсәлек бәхетен татыҡҡан өсөн Аллама рәхмәт уҡып туймайым. Улар бит минең йәшәү мәғәнәһе, тормош асылы һәм йәме, йөрәк ялы. Иманлы, тәртипле, тәүфиҡлы, уңған, кешелекле булғандары өсөн балаҡайҙарымдан ризамын.

Бәпәй саҡтарында өләсәһе менән олатаһы ла (минең атаййым менән әсәйем), үҙем дә уларҙы халыҡ мәҡәлдәре нигеҙендә тәрбиәләнек. Марат менән Искәндәр ыҙғышып китҡәйнеләр нимәгәләр талашып, уларға "Саҡ менән Суҡ" бәйетен һөйләгәнем иҫемдә. Малайҙарым өсөн был онотолмаслыҡ һабаҡ булды. Артабан улар бер-береһенең ҡәҙерен белеп, бер-береһенә терәк булып үҫтеләр. Урал ҡустыларын да ныҡ матур тәрбиәләштеләр. Өйҙә гел башҡортса ғына һөйләшәбеҙ, хатты ла балаларым менән башҡортса ғына яҙышабыҙ. Уларҙың китаптарымды, әҫәрҙәремде уҡып, фекерҙәрен еткереп тороуҙарына ла ҡыуанам. Тимәк, мин дөрөҫ юлда.

Сабыйҙарыма башҡорт телен, башҡорт моңон күкрәк һөтөм аша биргәнмен, артабан мейеләренә милләтемдең көслө рухын һеңдергәнмен. Үҙемде һәр саҡ инә арыҫлан кеүек хис итәм. Әммә ғаиләле уландарымдың тормошона ҡыҫылмайым. Ҡайнә кеше өсөн был иң оло аҡылдыр, тип уйлайым. Балаларым ҡулдан ысҡынды, килен ҡарамағына күсте, күңелем тыныс. Хәҙер ғаиләм ишәйҙе - бишәү булып киттеләр - килендәремдә лә балаларым иҫәбенә индергәнмен. Әсәлек бурысым быны менән генә бөтмәй әле. Киләсәктә ейәнейәнсәрҙәрҙе һөйһәһе, уларҙы ла аяҡҡа баҫтырыһы бар. Бирһен Хоҙай!

**Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА,**
**яҙыусы, журналист.**

*АФАРИН!*

# УҠЫТЫУСЫЛАР ҘА ЯРЫША...



**Ошо көндәрҙә Өфө педагогтарының һөнәри осталығын һынаған сираттағы конкурстарға йомғаҡ яһалды. Быйыл "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы" конкурсы егерме дүртенсе тапҡыр, ә "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" ун етенсе тапҡыр ойошторолдо.**

Был һөнәри осталыҡ ярыштарында барлығы 66 педагог ҡатнашты, шуларҙың 21-е йәштәр. Ойоштороусылар әйтеүенсә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, башланғыс синыфтар, рус теле һәм әҙәбиәте, инглиз теле уҡытыусылары иң әүҙемдәре булған. Әйткәндәй, был юлы баш ҡаланың 16 башҡорт теле уҡытыусыһы көс һынашты. Ярыш, йылдағыса, оло тәжрибә уртаҡлашыу майҙансығына әүерелде, уҡытыусылар өс аҙна дауамында алты төр һынау үтте. Һөҙөмтәлә, "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы" конкурсында 3-сө гимназияның физика уҡытыусыһы Петр Белобородов абсолют еңеүсе тип табылды. Ә бына "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсында 58-се лицейҙан Әлфиә Ғәзизова **(һүрәттә)** абсолют еңеүсе булды һәм ул республика кимәлендә Өфө данын яҡлаясаҡ.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

✓ Берәй аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡҡан хәлдә һирәк-һаяҡ ҡыҙып та ала, әммә шунда уҡ кинәт кенә тышҡа сығып китә торғайны. Атайым тышта үҙенә берәй шөғөл таба һалып ала ла, бар асыуын сығарып бөтә.



ИР-ЕГЕТҺҮҘЕ

# УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ,

## йәки Гүзәлдәребеҙҙе ҡыйырһытмайыҡ!



**Гәзитебеҙ биттәрендә ғаилә темаһына арналған мәҡәләләр, ир-егеттең дә, ҡатын-ҡыҙҙың да ғаиләләге урыны, бурысы хаҡындағы һәр төрлө, бәғзе ваҡыт бәхәскә этәрерҙәй фекерҙәр баҫылыуы "Киске Өфө"бөҙҙө тағы ла уҡымлыраҡ итә, тип уйлайым. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың хәле тураһындағы мәҡәләләр, әлбиттә, күберәк баҫыла. Гүзәлдәребеҙҙең психологияһы беҙҙекенә - ирҙәрҙекенә ҡарағанда күпкә ҡатмарлыраҡ, шуға күрә бихисап һорауҙар тыуып ҡына торалыр инде.**

Берәүҙәр башҡорт ҡыҙҙарының ҡырыҫыраҡ сифаттары хаҡында һөйләшергә ярата, икенселәр уларҙың ҡурсалауға мохтажлығы тураһында һүҙ йөрөтә. Шундай мәсьәләләрҙе күтәргәндә гүзәлдәребеҙҙең хәлен ир-егеттәр менән мөнәсәбәттәре аша сағылдырыу тәбиғиҙер, сөнки ғаилә тормошо тап ана шул ике енес вәкиленең дөйөм эше бит инде. "Беҙ һәр саҡ яҡлауға мохтаж", тигән һымағыраҡ лозунг менән башлыса ҡатын-ҡыҙ үҙе сығыш яһай. Шуғамылыр, беҙгә, ир-ат халҡына, "сыбыҡ" йышыраҡ эләгә. Үҙем әлеге "көслө зат" вәкиле булараҡ, йыш ҡына "үҙебеҙҙекеләр"ҙе яҡлашып, ир-аттың бәғзе ваҡыт ҡатын-ҡыҙҙар тулыһынса аңлап етмәҫтәй үҙенсәлектәре хаҡында сығыш яһағылағаным да бар. Әммә быны нәфис заттарыбыҙға ҡаршы сығыу тип һанау дөрөҫ булмаҫ, сөнки "көслө"нө "көсһөҙ зат"ҡа ҡаршы ҡуйыу - ирлек билдәһе түгел...

Бүтәндәр хаҡында һүҙ йөрөткәндә, уларҙы һәр саҡ үҙеңдең берәй яҡының менән сағыштырыу ҡулайлыраҡтыр. Сөнки оҙаҡ йылдар бергә йәшәгән кешеңде һинән башҡа бер кем дә яҡшы белмәй, ә һин үҙең уның эсен-тышын тигәндәй ятлап алып бөткән булып сығаһың. Хатта уның инде был донъяла булмауына ҡарамаҫтан, берәй хәл-ваҡиға ваҡытында "Ошо мәлдә минең атайым (йә әсәйем) шулай тип әйтер ине", тип фекерләп тә алаһың. Ана шундай йылы хистәр ҡалдырған яҡын кешең булыуы - үҙе бер ҙур бәхеттер. Һуңғы осор, хатта дәүләтебеҙ кимәлендә, ғаилә ағзаларын ҡыйырһытыуҙарға ҡаршы йүнәлтелгән теманы йыш күтәрәләр. Ошондай мәсьәлә ҡуҙғатылыуына мин дә ифрат шатмын. Хәйер, бындай темаға битараф ҡалыусы кеше һирәктер ҙә. Ә бит ғаиләлә рәнйетелеүсе зат - ир-ат түгел! Уларҙың барыһы ла ҡатындар йә иһә балалар. Ғаиләһен ҡыйырһытыусы көслө заттарыбыҙ өсөн оялам да хатта.

Ошо мөһим темаға әңгәмәләшкәндә башта үҙемдең ғәзиздәремде миҫал итеп килтермәк булдым. Минең атайымдың әсәйемә бер ҡасан да "тырнаҡ осо менән дә" тейгәне булманы. Беҙгә - ғаиләләге дүрт малайға ҡарата, әлбиттә, талапсан булды ул. Малай халҡына бер аҙ "аҡыл сыбығы" кәрәк булғандыр инде. Әсәйемә генә түгел, ғаиләлә яңғыҙ ғына ҡыҙ бала - берҙән-бер Ғәлиә апайыбыҙға ла ҡаты ҡығылманы. Дин юлында булған атайыбыҙ эскелеккә лә ҡырҡа кире ҡараште ине. Ғаилә булғас, һәр саҡ ал-да гөл бумауы - тәбиғи. Берәй аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡҡан хәлдә һирәк-һаяҡ ҡыҙып та ала, әммә шунда уҡ кинәт кенә тышҡа сығып китә торғайны. Бәхеткә, ауыл ерендә бер ҡасан да эш бөтмәй. Атайым тышта үҙенә берәй шөғөл таба һалып ала ла, бар асыуын сығарып бөтә. Бер-ике сәғәт туҡтауһыҙ утын ярып, йә иһә ихатала ҡойма-маҙар йүнәтеп йөрөй, унан бите буйлап аҡҡан тирен һыпыра-һыпыра, нәҡ тә болот араһынан сыҡҡан ҡояштай йылмайып, хәбәрҙәрен һөйләй-һөйләй, ҡабаттан өйгә килеп инер ине: "Ҡана, самауырыңды ҡуй әле, сәй эсеп алайыҡ. Һыуһаттырҙы, килеп тороп...". "Тере" күмерле самауыры һәр саҡ әҙер булған әсәйем: "Ah, ah, шулай булмай ни! Анауынса утын ярыуға... Үҙем саҡырып индерәйем, тип тора инем әле", - тигән һымаҡ һүҙҙәрен теҙә-теҙә, йүгерә-атлай соланға сығып китә. Итек ҡунысы менән бер-икене елпетеп алған йылтыр самауыр "йырлай" ҙа башлай. Беҙҙең дә күңелебеҙ күтәрелеп китә. Баллап-ҡаймаҡлап, тигәндәй, ҡыҙыҡ хәбәрҙәр һөйләшә-һөйләшә рәхәтләнеп сәй эсеп алабыҙ. Атай менән әсәй араһында урын алған иң бәләкәс Йәлил ҡустымдың икмәгенә май яғып, атайым уның ҡулына тоттора. Ҡалғандарыбыҙ урындыҡҡа йәйелгән ашъяулыҡ тирәләп ултырып алып, барыбыҙ ҙа "бисмилләһ" әйтеп, тәмләп-тәмләп сәй эсергә керешәбеҙ...

Атайым менән әсәйем бер ваҡытта ла бер-береһенә исемдәре менән өндәшмәне. Башҡа кешегә икенсеһе хаҡында ниҙер әйткәндә лә "балаларҙың әсәһе" йә "атаһы" тиер инеләр. Халҡыбыҙ лөғәтен-

ИР-ЕГЕТҺҮҘЕ

# ТЫЛЫМ ТЫНЫС БУЛДЫ...





Ғаиләлә ете малай, бер ҡыҙ үҫһәк тә, ғүмер буйы мине ҡатын-ҡыҙҙың ышанысы, өмөтө оҙатып барҙы. Иң тәүҙә, әлбиттә, әнейемдең ышанысы ҙур роль уйнаны. Мин хәрби булырға ҡарар иткәс, ул теләгемә ҡаршы төшмәне. Әлбиттә, Афғанстанға киткәс, уның ашы - аш, йоҡоһо - йоҡо булмағандыр, әммә ул бер ваҡытта ла зарланманы, һәр ваҡыт иң ышаныслы терәк булды. Әнейҙе мин нык яраттым, әле лә яратам, иҫкә алмаған көнөм юҡ. Әней - иң яҡын, иң аҡыллы, иң хәстәрлекле, иң матур, иң кәрәкле һәм иң яратҡан кеше.

Афғанстандан ҡайтҡас, ғаилә ҡорҙом. Ҡатындан да уңдым тип әйтә алам, сөнки Абхазия, Чечня һуғыштарында ла ҡатнашырға, хәрби командировкаларҙа ла булырға тура килде һәм ул һәр ваҡыт мине тыныс ҡына оҙатып ҡалды, шатланып ҡаршы алды. Тыл тыныс булғас, хеҙмәттә лә еңелерәк булғандыр, моғайын. Шуға ла уға, уның сабырлығына, түҙемлегенә һоҡланам һәм бик тә рәхмәтлемен. Ҡатын - ул терәк, ныҡлы тыл һәм иртәгәһе көнгә ышаныс.

Байрамда әнейҙәрҙе, ҡатындарҙы, ҡыҙҙарыбыҙҙы ҡотлап, яҡшы, матур һүҙҙәр еткерергә тейешбеҙ, әммә мин улар бындай һүҙҙәргә 8 Мартта ғына түгел, көн һайын лайыҡ, тип уйлайым. Бигерәк тә ҡыҙ балаларҙы йышыраҡ маҡтарға, йышыраҡ үҙебеҙҙең үтенес-һорауҙарыбыҙ менән мөрәжәғәт итергә кәрәк. Улар ата-әсәләренең олоғайыуын, үҙҙәренең ярҙамына мохтаж икәнен аңларға тейеш. Әлбиттә, ярҙамға мохтаж түгелбеҙ, әммә шулай хатта ябай ғына һорауҙар менән мөрәжәғәт итеп тә, улар иңенә һалынған бурыстың әһәмиәтен күтәрергә кәрәк, атайҙарына кәрәк икәнлектәрен белеп торһондар. Ҡыҙҙар - аҡыллы, матур, яғымлы, һине ихлас яратыусы. Улар - һинең киләсәгең, ҡартлыҡ көнөңдәге өмөтөң.

Был яҡлап та мин бәхетле, минең ике ҡыҙым, улым бар. Улар юғары белем алып, эшләп йөрөйҙәр. Хәҙер өлкән ҡыҙым үҙе башлы-күҙле булып, ейәнсәр бүләк итте. Ейәнсәр - ул үҙе айырым тема. Юҡҡа ғына "Балаңдың балаһы балдан татлы" тимәйҙәрҙер. Шуға, тормошта иң ҡәҙерле ҡатын-ҡыҙҙар араһында булыуы - үҙе бәхет тип уйлайым. Улар эргәһендә үҙең тураһында хәстәрлек күргән, яратҡан кешеләргә ярҙамсы һәм яҡлаусы булғы килә, сөнки һине һәр саҡ яҡты, йылы өйҙә хеҙмәттән йәки эштән һуң көтәләр, һәм һин һәр ваҡыт улар эргәһенә ашҡынып ҡайтаһың, ошо арала уларҙы һағынып та өлгөрәһең, йәнеңдән дә артыҡ яратаһың...

**Иршат ФӘХРЕТДИНОВ, отставкалағы полковник.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓5 мартҡа Башҡортостанда коронавирустан тағы 2 кешенең вафаты хаҡында билдәле булды, йәғни пандемия башланғаны бирле 290 кеше тажзәхмәттән донъя ҡуйған. Төбәктә барлығы 29259 кешелә, һуңғы тәүлектә 133 кешелә COVID-19 раҫланған. Уларҙың 23571-е һауыҡҡан. Һуңғы тәүлектә шулай уҡ 179 кешегә дауахананан тыш пневмония диагнозы ҡуйылған. Әле стационарҙарҙа 264 кеше дауалана, уларҙың 13-ө - ауыр хәлдә. 5134 кеше өйҙә дауалана.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Салауат Юлаев" хоккей клубы уйынсылары тренер штабы менән осрашты һәм уларға КХЛ плей-офф уйындарында уңыштар, Гагарин Кубогын яулауҙарын теләне. Билдәле булыуынса, юлаевсылар Континенталь хоккей лигаһының регуляр чемпионаты һөҙөмтәләре буйынса Көнсығыш конференцияның турнир таблицаһында дүртенсе урында килгәйне.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров һаулыҡ һаҡлау министрына кешеләр ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн санитар авиацияны әүҙемерәк ҡулланырға ҡушты. Быйыл республика федераль саралар иҫәбенә махсус медицина ҡорамалдары менән йыһазландырылған "Ансат" вертолетын һатып алған. Йыл дауамында ул 97 осош яһап, 97 пациентты, шул иҫәптән юл-транспорт ваҡиғаларына эләгеүселәрҙе, эвакуациялаған. Быйыл 121 осош планлаштырыла. Йыл башынан алып вертолет 9 осош яһаған да инде.

✓Бер аҙна элек Бүздәк районында ҡаңлы ырыуы вәкилдәре ҡоро үткәйне. Был аҙнала иһә Баҡалы районында юрмый ырыуы башҡорттары йыйыны булды. Юрмый ырыуы башҡорттары бөгөн башлыса үҙҙәренең аҫаба ерҙәрендә - Татарстан Республикаһының Әлмәт, Лениногорск, Бөгөлмә, Аҙнаҡай һәм Мөслим райондарында йәшәй. Был ырыу биләмәһенең күп өлөшө элек Минзәлә өйәҙенә ҡараған, шуға ла уларҙы Минзәлә башҡорттары тип атайҙар. 1920 йылда Юрмый ырыуы ерҙәренең күпселек өлөшө Татарстанға бирелгән.

✓Башҡортостандың 48 кешеһе "Стоп. Суррогат" программаһында ҡатнашып, суррогат алкоголь һатыусылар тураһында хәбәр иткән өсөн икешәр мең һум аҡса менән бүләкләнгән. Ҡыҙыу бәйләнешкә барлығы 1600 хәбәр килгән. Сауҙа министрлығы хеҙмәткәрҙәре 750 рейд үткәреп, 5 мең берәмек эсемлекте тартып алған. Быйыл да "Стоп. Суррогат" программаһы үҙ эшен дауам итәсәк һәм был юлы хеҙмәттәшлеккә республиканың Эске эштәр министрлығы ла йәлеп ителә.



*✓ Ҡартлыҡ тиҙ генә баҫа ла китә бит ул. Башлыса, бала-сағаларығыҙ, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ хаҡында сөкөрҙәшеп һөйләшә-һөйләшә сәй эсеп, шунан ғына ҡәнәғәтлек табып ултырыр мәлдәр ҙә оҙаҡ көттөрмәй килеп етә.*

дәге бына шундай атамалар ҙа бер-береңә хөрмәт хистәре уятыуға булышлыҡ итәләр, тип уйлайым. Шулай уҡ атайымдың да, әсәйемдең дә беҙгә - балаларға йә күрше-күләнгә, хатта үҙҙәренең яҡын туғандарына ла бер-береһен ошаҡлашып ултырғанын ишеткәнем булманы, киреһенсә, һәр саҡ тик яҡшы хәбәрҙәр генә һөйләргә тырышалар ине. Уларҙың баҡыйлыҡҡа күскәненә әллә күпме йылдар үтеп китте. Әсәйем мәрхүмәнең һәр саҡ намаҙҙан һуң: "Йә, Раббым, балаларымдың барыһының да ҡушаҡтары менән ҡуша ҡартайыуын насип ит",- тип доға ҡылғаны хәтеремдә. Ата-әсәнең балалары өсөн ихлас ялбарыуын Аллаһ Тәғәлә ҡабул итә, тигән сахих хәҙис бар. Ғаиләбеҙҙәге иң оло ағайым һикһәнгә етеп килә, ә бәләкәс ҡустыма инде алтмыш йәш тулды. Бишебеҙ ҙә йәштән алған хәләл ефеттәребеҙ менән бергә ҡартайып киләбеҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ үҫә, әлхәмдүлиллаһ. Маҡтанырға иҫәбем юҡ, әммә, ғаиләлә дүрт малай булып, ҡатындарыбыҙҙы - кемдеңдер ғәзиз балаларын бер ҡасан да ҡыйырһытҡаныбыҙ булманы, тип тыныс күңел менән әйтерлек хәлдәмен, Аллаға шөкөр. Беҙҙең яҡтағы бәғзе бер ҡатын-ҡыҙҙар теле менән әйтмешләй, "бисә туҡмап" ғүмер итмәйбеҙ. "Киске Өфө"лә баҫылған мәҡәләләр авторҙарына һәм башҡа сәйәсмәндәрҙең, депутаттарҙың ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ҡурсалауҙы фекерҙәренә ҡушылып, мин дә "Гүзәлдәребеҙҙе ҡыйырһытмағыҙ!" тип оран һалыр инем.

Ни өсөн халыҡта беҙҙе - ир-атты "көслө" тип атағандар? Бында рухи көс тә, әлбиттә, күҙ уңында тотолалыр. Әммә бөгөнгө темала тап физик көс хаҡында һүҙ бара бит, бына нимә! Урыҫта "Сила есть - ума не надо", тигән әйтем йөрөй. Аллаһ Тәғәлә ҡатын-ҡыҙҙы, башҡаларҙы йәберләр өсөн көслө итеп яралтмаған бит ир затын, бәлки, киреһенсә, хәләл ефетен, балаларын, ата-әсәһен, ә кәрәк саҡта йортон-илен һаҡлар өсөндөр. Борон ата-бабаларыбыҙ ир-атты батыр тип атауҙы хуп күргән. Ата-әсәләре лә улдарының көслө, батыр булып үҫеүен теләгән.

Ә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы иһә "көсһөҙ зат" тип йөрөтәбеҙ. Үҙҙәрен шулай тип атағанға улар хатта үпкәләмәй, киреһенсә, быныҡ менән килешеп кенә тора. Тимәк, улар, көсһөҙ булараҡ, беҙҙән - ир-аттан яҡшы мөнәсәбәт, яҡлашыу өмөт итә. Бәғзе бер кинофильмдарҙан ҡарап, "Физик яҡтан көслө ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа бар бит, улар үҙҙәрен буйтым яҡларлыҡ хәлдә", тип, берәүҙәр, бәлки, минең менән бәхәсләшергә лә әҙерҙер. Әммә, минең ныҡлы инаныуымса, ниндәй генә бәләкәс кәүҙәле, ҡураныс ир һәм ниндәй генә олпат ҡатын-ҡыҙҙы алып ҡараһаҡ та, ир - ир булып ҡала инде ул. Ҡасандыр ир эскелеге арҡаһында әленән-әле ана шундайыраҡ ығы-зығы сығып торған ғаиләнең әлеге "көсһөҙ" яртыһына шаяртып ҡына: "Һинең бит уны бер ҡуллап ҡына күтәрә алырлыҡ көсөң бар. Пиджак һымаҡ еңел генә бит ирең. Нисек ул һине ҡыйырһыта ала ул? Өҫтөңә менеп килһә, "ҡағып ҡына" төшөрөп ебәрә алмайһыңмыни шуны?" - тип һорағайным. "Кәтмәкәй генә булһа ла - көслө бит ул. Ыңғайына булмай ғына ҡара..." тигән яуап алдым. Бына шундай физик көс бирелгән бит инде беҙгә - ирҙәргә.

"Гүзәл", "көсһөҙ", "нәфис" тип атаған һылыуҙарыбыҙҙы шулай уҡ наҙлы, матур гөлсәскәләр менән дә сағыштырабыҙ. Ысынлап та, үҫеп ултырған сәскәнең тажына яңылыш ҡына ҡатыраҡ тейһәң дә ситенән ҡарайып, һулый башлауына иғтибар иткәнегеҙ барҙыр. "Сәскәләребеҙ" менән иплерәк, һаҡсыл мөғәмәләлә булайыҡ, тимәксемен. Шул ысынбарлыҡты таный белеү ҙә кәрәктер: сәскә булғас, уның һабығында рауза гөлөнөкө һымаҡ сәнскеһе лә булыуы - тәбиғи. Әммә, бер аҙ ғына ҡулды сәнсте тип, бар гөлгә асыуҙы төшөрөп, уны ҡәҙерһеҙләп ташлау һис кенә лә ярамай, егеттәр. Ҡасандыр, хәләл ефет булып килергә ризалығын биргәндә, ҡатындарыбыҙ беҙгә - көслө затҡа үҙҙәрен тулыһынса ышанып тапшырған, тип һанау кәрәк. Һәммәбеҙ ҙә кәләштәребеҙҙе яратыр, ҡәҙерләр өсөн алғанбыҙ. Ҡасандыр, күктәге айҙы, йондоҙҙарҙы алып бирергә вәғәҙәләп тә, уларҙы әгәр ерҙәге ябай ғына һөйөүебеҙҙән мәхрүм итәбеҙ, ул ғына ла түгел, хатта ҡыйырһытырға ла тотонабыҙ икән, бынан һуң кем беҙҙе хөрмәтләр?..

Егеттәребеҙҙең күпселеге, әлхәмдүлиллаһ, үҙен ысын ирҙәрсә тота. Әммә бер "сирле" һыйыр бөтә көтөүҙе буяй, тигәндәй, үкенескә, арала һирәк-һаяҡ шундайҙар ҙа килеп сыға шул. "Көсһөҙ" затҡа ҡул күтәрергә баҙнат итеүсе күптәрҙең дә бит ғаиләһендә яратҡан ҡыҙҙары үҫеп килә. Шул ғәзизәкәйҙәренең ҡасандыр ниндәйҙер берәй яуыз ир-ат затынан иҙелеп, туҡмалып йәшәүен, моғайын, улар үҙҙәре лә теләмәҫ ине...

Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла, ти халыҡ мәҡәле. Берегеҙҙең типһә тимер өҙөрҙәй, айыуҙай ғәйрәтле, ә икенсегеҙҙең дәрте ташып, "тыу бейәләй ҡыя һикереп, уйнаҡлап ҡына" (халыҡса әйтеүем өсөн ғәфү итегеҙ) йөрөр мәлегеҙҙе - алтын йәшлегегеҙҙе талашып үткәрмәгеҙ, бер-берегеҙҙе наҙлап, һөйөп ҡалығыҙ. Ҡартлыҡ тигән нәмә тиҙ генә баҫа ла китә бит ул. Унда инде ихтыяжығыҙ ҙа башҡараҡ була. Башлыса, бала-сағаларығыҙ, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ хаҡында сөкөрҙәшеп һөйләшә-һөйләшә сәй эсеп, шунан ғына ҡәнәғәтлек табып ултырыр мәлдәр ҙә оҙаҡ көттөрмәй килеп етә. "...Йәшлегемә атлап түгел, йүгереп ҡайтыр инем", тип һары һағыштарға батһаң да, кемдер әйтмешләй, "поезд үтеп киткән" була... Үкенестән булмаһын, уландар, ҡыҙҙар. Бына шул.

Йыш ҡына нәфис затыбыҙҙың ҡулдарына көрәк тотоп ер ҡаҙғанын, ҡар көрәгәнен, бесән тейәгән һымаҡ ауыр эшкә егелеүен дә күргеләйем. Гүзәлдәребеҙҙе тура мәғәнәһендә ҡыйырһытыуҙарҙы ғына түгел, хатта бына ошондай күренеште лә һис бер өнәп еткермәйем. Был эштәрҙе фәҡәт ир-егет атҡарырға, Аллаһ Тәғәлә тарафынан бирелгән физик көсөн ул тик ана шуның һымаҡ файҙалы эшкә генә сарыф итергә тейештер, тигән инаныуҙамын. Үҫеп килгән малайҙарыбыҙҙы ла шундай рухта тәрбиәләү кәрәктер. Илебеҙҙә ҡатын-ҡыҙҙың ир-ат менән тиң хоҡуҡлы булыуын "улар ҙа ирҙәр менән бергә егеләп йөрөргә тейеш", тип аңлаһаҡ - ололарҙан-оло хата булыр, хөрмәтле яҡташтар.

Шәриғәт ҡанундарына ярашлы ир кеше, әлбиттә, ғаилә башлығы, йорт хужаһы ла, әммә был үҙенең хәләл ефетеңә ҡарата артыҡ ҡаты булырға кәрәк, тигәнде аңлатмай. Талапсанлыҡ - тупаҫлыҡтың синонимы түгел. Үкенескә, динебеҙ ҡанундарын ҡатын-ҡыҙға ҡарата ғәҙелһеҙ итеп күрһәтергә тырышҡандар ҙа бар. Был - динде белмәүҙән килә. Бәйғәмбәребеҙ саллаллаһу ғәләйһи үәс-сәләм иң беренсе әсәй кешене хөрмәтләргә (атайҙан да тәүҙәрәк), ҡатыныңа ҡарата ла иң яҡшы, ғәҙел мөнәсәбәттә булырға ҡушҡан. Аллаһ илсеһенән хәләл ефетеңә асыуланғанда үҙеңде нисек тотоу хаҡында һорашҡастары, Бәйғәмбәр сғс: "Асыуыңды тышҡа сығарма!" - тип әйткән. "Әгәр ҙә бәхәстә ҡатын хаҡ түгел икән?.." тигән киләһе һорауға: "Асыуыңды тышҡа сығарма!" - тип тағы ҡабатлаған... Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың ваҡ-төйәк мәсьәләлә бигүк дөрөҫ булмаған яҡтарына ҡапылғара иғтибар итеп, әллә ни ваҡланып тормаһаҡ, үҙебеҙҙән ирлек бәҫебеҙ төшмәҫ, ин шәә Аллаһ. Гүзәлдәребеҙ ағинәйҙәр нәсихәтен тыңларға тейеш булған һымаҡ, бәғзе ир-егеттәребеҙ ҙә аҡһаҡал һүҙенә ҡолаҡ һалыр, тигән ышаныстамын.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*ҺҮҘ - ҮҘЕНӘ*

# УҠЫТЫУСЫ ЛА УЛ!

Табип һөнәрен һайлағандар Гиппократ антын бирә, ил һағына баҫҡан һалдат присяга ҡабул итә. Ә уҡытыусы, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ уҡытыусы, ошо юлды һайлағанда уҡыусыларына, иленә, халҡына нимәләр вәғәҙә итә ала һуң? "Ҡарында ятҡан баланың хан булаһын, биләүҙә ятҡан баланың бей булаһын кем белгән?" тигән әйтем бар бит халыҡта. Ҡарында йәки биләүҙә ятҡан баланың киләсәктә кем булырын белмәһә лә, үҙе уҡытҡан, үҙе тәрбиәләгән баланың ҡайһы йүнәлештә, ниндәй һүҡмаҡтан китерен уҡытыусы, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ уҡытыусы, нескә күңеле менән һиҙә, белә һәм күрә йөрөй. Ҡатын-ҡыҙ уҡытыусыға әсәлек менән бергә тойомлау, алдан күрә белеү һәләте лә көслө бирелгән бит ул!

"Үҙ фәнендә көслө булған, уны тәрән аңлаған, ысын күңелдән яратҡан уҡытыусы ғына үҙ уҡыусыларына тәьҫир итә ала",- тигән һүҙҙәр менән тулыһынса килешәм. Уҡыусылар бит бәләкәй генә йондоҙҙарҙы хәтерләтә. Уларҙың нығыраҡ, сағыуыраҡ яныуҙары беҙҙән - уҡытыусыларҙан тора.

Киләсәк уҡытыусы ҡулында, сөнки бала күңеленә ғилем донъяһының иң матур тәьҫоратын, тәүге мәғлүмәтен ул һала, тәүге орлоҡтарҙы ла ул сәсә, шытымдарын күреп һоҡлана, ысыҡ тамсылары менән һуғара. Уҡытыусы тураһында юҡҡа ғына: "Үҙеңдең тормошоң менән бер тапҡыр йәшәһәң, уҡыусыларыңдың тормошо менән мең тапҡыр йәшәргә бурыслыһың... Шул саҡта ғына мәңгелек ғүмер юрарға була!" - тимәгәндәрҙер!

Фекеремде бөйөк Гетенең һүҙҙәре менән йомғаҡлағым килә: "Буласаҡ уҡытыусы донъяға килгәндә уның баш осонда өс фәрештә пәйҙә була. Беренсеһе әйтә: "Күңелең һинең мәңге йәш булыр, сөнки һине һәр ваҡыт балалар уратып алыр..." Икенсеһе: "Күңелең гел матур булыр, сөнки һин балаларҙы гел яҡшылыҡҡа өйрәтәсәкһең", - ти."Һин бәхетле буласаҡһың, сөнки хеҙмәтеңдең емештәрен татыясаҡһың, уҡыусыларың һинән юғарыраҡ бейеклеккә күтәреләсәк, ә шунан да ҙурыраҡ бәхет юҡ",- ти өсөнсө фәрештә".

Мин - уҡытыусы! Уҡытыусы булыуым менән бәхетлемен! Ҡолағымда мәктәп ҡыңғырауы менән бер рәттән, уҡыусыларымдың көмөш ҡыңғырау сыңын хәтерләткән тауыштарын ишетеү менән дә бәхетлемен!

**Рүзидә ҮТӘШЕВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республикала "Башҡортостандың иң яҡшы тауарҙары" конкурсы башланды. Унда тауар һәм хеҙмәт тәҡдим итергә мөмкин. Менеджменттың заманса ысулдарын индергән предприятиелар өсөн шулай уҡ "Иң яҡшы сифат менеджменты" һәм " Сифат буйынса иң яҡшы менеджмент" конкурстары үткәрелә. Республика бәйгеһе лауреаттары объектив баһа, диплом һәм логотиптан тыш, "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы тауары" Бөтә Рәсәй конкурсы программаһында ҡатнашыу хоҡуғын ала. Былтыр республиканан 33 ойошма ҡатнашып, илдең 60 субъекты араһында икенсе урынға лайыҡ була.

✓Былтыр Рәсәйҙең күпселек төбәктәрендә йәшәү сифаты үҙгәрмәгән тиерлек. РИА Новости агентлығы әҙерләгән рейтингта тәүге өс урынды Мәскәү (82,164 балл), Санкт-Петербург (80,634) һәм Мәскәү өлкәһе (76,068) биләй. Тикшереneү мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостан (50,009) 29-сы баҫҡыста тора, 2019 йылда республика 25-се урында ине. Илдең 85 субъекты араһында һуңғы өс урында - Ҡарасай-Черкес Республикаһы (27,693), Байкал аръяғы крайы (26,889) һәм Тыва Республикаһы (17,506).

✓2021 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостанда халыҡтың йән башына йәшәү минимумы 10 015 һум күләмендә билдәләнде. Документҡа ярашлы, хәҙер эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы - 10 641 һум, пенсионерҙарға - 9 605 һум, балаларға 10 077 һум тәшкил итә. "Ҡарар 2021 йылдың 31 декабренә тиклем ғәмәлдә була", - тип билдәләнә документта. Башстаттың ошо йылдың 1 ғинуарына яҡынса баһаһы буйынса, республикала 4,016 миллиондан ашыу кеше йәшәй.

✓Башҡортостанда өс ауырлыҡты үлсәү контроле пункты файҙаланыуға тапшырыла, улар 2021 йылдың 24 февраленән 24 майына тиклем һынау режимында эшләй, тип хәбәр иттеләр республиканың Төҙөлөш һәм архитектура министрлығынан. Автоүлсәүҙәр Благовещен районында Подымалово - Николаевка участкаһында; Дүртөйлө районында Дүртөйлө - Нефтекама автомобиль юлында һәм Мәсетле районында Кропачево - Мәсәғүт - Әчит трассаһында ҡуйыла.

✓ Февралдән Рәсәй Греция һәм Сингапур менән халыҡ-ара авиабәйләнеште тергеҙә. Самолёттар Мәскәүҙән оса. Әлеге ваҡытта Төркиәгә, Танзанияға, Швейцарияға, Мысырға, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә, Ҡырғыҙстанға, Ҡаҙағстанға, Сербияға, Көньяҡ Кореяға, Японияға, Эфиопияға, Финляндияға, Вьетнамға, Һиндостанға, Катарға, Грецияға, Сингапурға, Кубаға, Сейшел һәм Мальдив утрауҙарына осорға мөмкин.

ҠЫҪҠАСА

# ЮЛДАРҒА - КАМЕРАЛАР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров юлдарҙағы хәл-торош буйынса кәңәшмә үткәреп, контролләүсе идаралыҡҡа ни өсөн Татарстан федераль трассаларҙа ҡуҙәтеү камералары ҡуя, ә Башҡортостанда быны эшләмәүҙәрен асыҡларға ҡушты.** Был - Хөкүмәттең транспорт блогының эшләп еткермәүе, тине ул: "Трассаны федераль йәки республиканыҡына бүлергә ярамай. Барлыҡ аварияләр Башҡортостан территорияһында була һәм улар өсөн беҙ яуап бирәбеҙ. Ведомствоара Йәмәғәт хәүефһеҙлеге советы менән берлектә камералар буйынса мәсьәләне хәл итергә һәм оптималь ҡарарға килергә кәрәк. Беҙҙең барлыҡ юлдарҙа ла фото- һәм видеотеркәү комплекстары торорға, 1 сентябргә тиклем федераль трассаларҙа кәмендә 100 камера ҡуйылырға тейеш".

✓ **Граждандарҙың автобустар салонларында ҡулаҡсаһыҙ иҫәпләшеү терминалдары булмауына зарланыуы арҡаһында Башҡортостанда шәхси эшҡыуарҙарҙың касса аппараттарын ҡулланыуы буйынса тикшереүҙәр башлана.** Быйылдан алып онлайн-кассаларға бәйле яңы штрафтар ғәмәлдә. Контроль-касса техникаһын (ККТ) ҡулланмаған өсөн штраф күләме бирелмәгән чек суммаһынан күберәк булыуы мөмкин. Федераль ҡануниәттә ҡаралған осраҡтарҙа юл хаҡын ҡулаҡсаһыҙ түләүҙе ҡабул итеүҙән баш тартыусылар өсөн штраф санкциялары ҡулланыу Федераль һалым хеҙмәте компетенцияһына ҡарай. ККТ ҡулланмаған өсөн вазифалы кешеләргә штраф - 10 мендән, ә инде предприятиелар өсөн 30 мендән кәм булмаҫҡа тейеш. Бындай осраҡ ҡабаттан асыҡланғанда, вазифалы кешеләр бер йылдан ике йылға тиклем дисквалификациялана, ә шәхси эшҡыуарҙарҙың эшмәкәрлеге 90 көнгә тиклем туҡтатылырға мөмкин.

✓ **Ошо көндәрҙә Ағиҙел йылғаһы аша һалынған яңы күперҙең тағы бер өлөшөн төҙөү тамамланды. Бөгөн барлығы 328, 6 метр арауыҡ һалынған. Объекттың дөйөм оҙонлого 688,8 метр тәшкил итә.** Мәғлүм булыуынса, Ағиҙел аша 1956 йылда төҙөлгән иҫке күпер бөгөн авария торошонда. 2018 йылда ремонтланыуға ҡарамаҫтан, белгестәр уның бары тик еңел машиналар өсөн тәғәйенләнгәндә тағы ла 2-3 йыл ғына хеҙмәт итә аласағын фаразлай. Һауа температураһы түбән булған ваҡытта уның аша йөрөү бөтөнләй туҡтатыла. Шуға күрә яңы һәм иҫке күпер араһында тағы ла бер күпер төҙөү республика һәм ҡала алдында тәү сиратта хәл ителә торған мәсьәлә. Күпер төҙөлеше быйыл октябрҙә тамамланырға тейеш. Ул сафҡа индерелһә, ҡалаға көньяҡтан инеү һәм сығыу юлы бер аҙ бушап ҡаласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН



# БАТЫР КУБОГЫНА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Батыр кубогы" республика турнирына старт бирҙе.**

Беренсе тапҡыр үткәрелгән был сараға йомғаҡ йыл аҙағында яһаласаҡ. Унда иң яҡшы спортсылар, тренерҙар, клубтар һәм федерациялар бүләкләнәсәк. Турнир мотоуҙыш буйынса егерме тапҡыр донъя, ике тапҡыр Европа чемпионы Николай Красников, грэпплинг буйынса биш тапҡыр донъя чемпионы Джефф Монсон, "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" титулына эйә Эльбрус Ниғмәтуллин, самбо буйынса ике тапҡыр донъя чемпионы Венер Ғәлиев һәм башҡа билдәле атлеттар сығыш яһаған спорт байрамы менән асылды. Радий Хәбиров оҫталыҡ дәрестәренә килгән йәш спортсыларҙың ата-әсәләренә рәхмәт белдерҙе. "Бында яҡшыраҡ һәм көслөрәк булырға килгән балаларҙы күреүемә бик шатмын. Беҙҙең идара итеүсе команда үҫмерҙәр спорт менән лайыҡлы шарттарҙа шөғөлләнһен өсөн күп көс һала. Был, моғайын, киләсәк быуын өсөн эшлә алған иң мөһим һәм кәрәкле эштәрҙән береһеләр. Беҙ төҙөгән заманса объекттар, беҙ ғорурланған иң яҡшы тренерҙар ярҙамында был балаларҙан ысын кеше сығыуына шикләнмәйем", - тине ул. Радий Фәрит улы Башҡортостанда эшләргә ҡалған күренекле спортсыларға ла рәхмәт әйтте. Республикалағы эпидемиология хәле күнекмәләрҙе тергеҙергә, спорт залдарын асырға булышлыҡ итеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шул уҡ ваҡытта санитария ҡағиҙәләрен үтәү мөһимлеген билдәләне. Турнирҙы асыу тантанаһы аҙағында Башҡортостандың иң яҡшы спортсылары дәүләт наградалары менән бүләкләнде.

# ӨЛГӨЛӨ ҒАИЛӘГӘ БАҺА

**Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнөндә - "Етегән" байрамында "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" асыҡ республика конкурсы еңеүселәре билдәләнде.**

Балаларын илһөйәр, телһөйәр итеп тәрбиәләгән, халҡыбыҙ тарихын һаҡлауға, мәҙәниәтебеҙҙе үҫтереүгә тос өлөш индергән, милли кәсептәрҙе тергеҙгән, башҡаларҙы ла был эшкә йәлеп иткән, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалаған ғаиләләр Стәрлетамаҡ ҡалаһында бәйге тотто. Шулай итеп, "Ғаилә оҫталығы" номинацияһында беренсе урынға лайыҡ булған өлгөлө ғаилә - Хәйбулла районы Бөләкәй Арыҫланғол ауылынан Суриндар, икенсеһә Салауат районы Урманҫы ауылынан Сәйетғәлиндар, өсөнсө урын - Саҡмағош районынан Ильясовтар. "Ғаилә ҡиммәттәре" номинацияһында тәүге урын Өфө районы Шамонино ауылынан Мәхмүтовтарҙа, икенсе урында Сибай ҡалаһынан Йәнбәковтар, өсөнсөләр - Миәкә районынан Ғәниевтәр ғаиләһе. "Ғаилә ижады" номинацияһында беренсе урында Стәрлетамаҡ ҡалаһынан өлгөлө ғаилә Ишмөхәмәтовтар, икенсе урында Өфө ҡалаһынан Шәһәрғәзиндар, өсөнсө урында Учалы районы Уральск ҡасабаһында йәшәүсе Үҙәнбаевтар. Ырымбур өлкәһенән килгән иң татыу, иң күп балалы, иң өлгөлө Ғәли Ғәфиәт улы һәм Рәйсә Әхмәҙулла ҡыҙы Сарбаевтарҙың күркәм ғаиләһе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының махсус призы - заманса телевизор менән бүләкләнде. Тәүге урындарға йөҙ, икенсегә илле, өсөнсө урынға утыҙ меңлек сертификаттар тапшырылды.

# МУСА МОРТАЗИНДЫ ИҪЛӘП

**2021 йылдың 20 февралендә дәүләт һәм хәрби эшмәкәр, легендар комбриг Муса Мортазиндың тыуыуына 130 йыл тулды.**

Башҡорт тарихы йылы сиктәрендә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы түңәрәк өҫтәл ойоштороҙо. Тарихсы ғалимдар, тыуған яҡты өйрәнеүселәр, республика һәм төбәк башҡорттары ҡоролтай ағзалары Мортазиндың биографияһындағы "аҡ таптар"ҙы ябырға планлаштыра. "Бөгөн бөтә сығанаҡтарҙа ла Муса Мортазиндың тыуған көнө 1891 йыл 20 февраль тип күрһәтелә. Ә 1925 йылда үҙе тултырған анкетала ул 32 йәш тип күрһәтә. Һанап ҡараһаң, 1893 йылғы булып сыға. 1937 йылда ҡулға алынғандан һуң тултырылған анкетала тыуған йыл тураһында графала 1891 йыл 20 декабрь тип яҙылған. Үлгән көнө лә төрлөсә яҙылған. Әлеге ваҡытта уның 1937 йылдың 27 сентябрендә атылғаны билдәле. Мәскәү архивтарының береһендә 1939 йылдың 23 октябрендә 48 йәшендә үлтерелгән тигән мәғлүмәт һаҡлана. Шулай уҡ уның шәжәрәһе лә ныҡлап өйрәнелмәгән", - тине Милли архив директоры Ниязбай Сәлимов.

Түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашыусылар Муса Мортазиндың көрәштәштәре иҫтәлеген мәңгеләштереү тураһында ла тәҡдим индерҙе. Һөҙөмтәлә резолюцияла комбригҡа һәйкәл ҡуйырға, Учалы районы Көсөк ауылындағы Мортазин музейының матди-техник базаһын нығытырға, БР Милли музейына урынлаштырыу өсөн "Ҡыҙыл командирҙар" картинаһының күсермәһен әҙерләү мөмкинлеген ҡарарға хәл ителде.

# ЕНӘЙӘТТӘР КӘМЕЙМЕ?

**2020 йылда эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре 28 меңгә яҡын енәйәттә ғәйепләнеүсене асыҡлаған. Был хаҡта республиканың Дәүләт Йыйылышы ултырышында Башҡортостан буйынса Эске эштәр министры, полицияның генерал-лейтенанты Роман Деев билдәләне.**

Ведомство башлығы депутаттарға республикала хоҡуҡ тәртибе торошо һәм полицияның 2020 йылғы эшмәкәрлегенең төп һөҙөмтәләре хаҡында һөйләне. Уның әйтеүенсә, талау, транспорт сараларын, мал, фатирҙан, гараждан, келәттән, база һәм магазиндарҙан урлау осраҡтары, шулай уҡ урам, көнкүреш, рецидив енәйәттәр, балиғ булмағандар араһында һәм эскән килеш ҡылынған хоҡуҡ боҙоуҙар һаны кәмегән. Ойошҡан енәйәтселек алып барған, йәғни 161 енәйәт ҡылған 93 енәйәти төркөм лидеры яуаплылыҡҡа тарттырылған. Шәхси йортҙан урлау менән шөғөлләнгән криминаль төркөмдә ҡатнашыусыларҙа (40 эпизод), енәйәти юл менән алған мөлкәтте һатҡандарға (60-ҡа яҡын эпизод), мутлашыу, урлау, талау менән эш иткән төркөмдәргә (6 эпизод) ҡарата ҡуҙғатылған эштәр судҡа ебәрелгән.

Башҡортостан буйынса Эске эштәр министры Роман Деев БР Прокуратураһы ҡарамағындағы ведомство-ара эш төркөмө менән йөгонтоло эшләгәне өсөн Контроль-иҫәп палатаһына рәхмәт белдерҙе. Палата 2020 йылда хоҡуҡ һаҡлау органдарына 124 материал, шул иҫәптән 45 тикшереү һөҙөмтәһе буйынса отчет биргән. Улар нигеҙендә бөтәһе 32 енәйәт эше ҡуҙғатылған. Тикшереү идаралығы аҡса урлау һәм милекҡә криминаль юл менән идара итеүҙең 16 осрағы буйынса тикшереү алып бара. Енәйәттәрҙең береһе "Уфаводоканал" муниципаль унитар предприятиеһында асыҡланған. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министры полиция компетенцияһына инмәгән мәсьәләләр менән мөрәжәғәт итеүселәр һаны кәмеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Быға "Хәүефһеҙ ҡала" хоҡуҡ һаҡлау сегменты булышлыҡ итеүе, бөгөн ул 63 муниципалитеттың 45-ендә эшләүе, унда ике меңгә яҡын фото-видеотеркәү камераһы йәлеп ителеүе билдәләнде.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Калинин районында туғыҙ йәшлек ҡыҙ асыҡ ҡалдырылған ҡоҙоҡҡа йығылып төшкән. Ашығыс хеҙмәттәр килеп еткәнсе, Калинин район хакимиәте хеҙмәткәре үҙе ҡоҙоҡҡа төшә һәм ҡыҙҙы яурындарына ултыртып, өҫкә алып сыға. Баш ҡала мэры Сергей Греков был хәлде асыҡлаясаҡтарын һәм ғәйеплеләр яуап бирәсәген, шулай уҡ баш ҡалала "Ҡоҙоҡ" операцияһы иғлан ителеүе хаҡында хәбәр итә. Өфө хакимиәте башлығы битараф булмаған кешеләрҙе асыҡ ҡоҙоҡтар хаҡында хәбәр итергә саҡыра.

✓Өфө ихаталарына шлагбаумдар ҡуйыу йышайҙы. Улар законға ярашлы булһа ла, ҡайһы бер шарттарға яуап бирепбөтмәй. Мәҫәлән, янғын-маҙар сыҡҡанда был шлагбаумдар ихатаға үтеп инергә бик ныҡ ҡамасаулай. Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса министрлыҡта белдереүҙәренсә, автоматик шлагбаумды уны асып ултырыусы консьерж булғанда, йә уны механик рәүештә асып булғанда ғына ҡуйырға рөхсәт ителә. Шулай уҡ урам саттарын торбалар һәм бетон плитәләр менән ябып ҡуйыу ҙа тыйыла.

✓Өфөлә яңы трасса буласаҡ. Был хаҡта социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итә: "Трасса Әй урамы менән Салауат Юлаев проспекты сатынан башланып, Менделеев урамына тиклем барасаҡ һәм артабан Эшсе хәбәрселәр, Высотная, Академик Ураксин урамдарын реконструкциялау һөҙөмтәһендә дауам ителәсәк. Был эш быйыл тамамланасаҡ. Шулай уҡ быйыл ҡаланың үҙәк урамдарының береһен - Революцион урамын тәртипкә килтерәсәкбеҙ. Был транспорт хәрәкәтендә айырым ҡатмарлыҡтар тыуҙырыуын аңлайым, әммә уны күптән ремонтларға кәрәк ине", - тип яҙа республика Башлығы.

✓Мәскәүҙең Кино йортонда Айнур Аҫҡаровтың Мостай Кәрим әҫәре буйынса төшөрөлгән "Өҫ таған" фильмының премьераһы булып үтте. "Өҫ таған" фильмы ла прокатҡа тиклем үк беҙҙең "Будем жить" фестивалендә ҡатнашып, икенсе урынға лайыҡ булды. "Еңмеш", "Өфөнән һөйөү менән" таҫмаларын ҡарағандан һуң беҙ Айнурҙы "башҡорт Кустурицаһы" тип атаған инек. Фильм юғары кимәлдә төшөрөлгән, уға уңышлы прокат теләйем", - тине Рәсәй кинематографистар союзының Йәштәр үҙәге директоры Дмитрий Якунин. Айнур Аскаровтың яңы фильмы киң прокатҡа 4 мартта сыҡты.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# БАЛАЛАРҒА - ЭКОЛОГИК БЕЛЕМ

**Өфө ҡала хакимиәтендә сираттағы оператив кәңәшмәнең был аҙналағы көн тәртибенә 2021 йылда "Башҡортостан ихаталары" республика программаһын тормошҡа ашырыу мәсьәләһе сығарылды. Был хаҡта Ҡала йәшәйешен тәьмин итеү буйынса идаралыҡ начальнигы Антон Тристан сығыш яһаны.**

Мәғлүм булыуынса, Өфө был программала өсөнсө йыл ҡатнаша һәм уның маҡсаты булып граждандарҙың хәүефһеҙ, уңайлы шарттарҙа йәшәүен тәьмин итеү тора. Ул ихата эсендәге юлдарҙы киңәйтеү менән бер рәттән, уны ремонтлау һәм ҡаты ҡаплам менән ҡаплау, тротуарҙар, йәйәүлеләр юлдарын төҙөкләндереү; сертификацияланған балалар һәм спорт майҙансыҡтары, ял зоналары эшләү; йәшелләндереү, шул иҫәптән ағастар, ҡыуаҡтар, газондар булдырыу; ихата территорияһына яҡтыртыу һәм видеокүҙәтеү системаһын ҡуйыуҙы күҙаллай. Быйыл был программаны тормошҡа ашырыуға республика бюджетынан, ҡала бюджеты һәм милек хужалары финанслашыуы менән бергә 303,1 миллион һум бүленә. Әлеге ваҡытҡа ихаталарҙы комплекслы төҙөкләндереүҙе проектлау эштәре тамамланған, улар халыҡ менән килешенгән. Быйыл 78 күп фатирлы йорттоң 17 ихатаһы төҙөкләндереләсәк, барлыҡ эштәрҙе башҡарыуға муниципаль контракт 31 мартта тамамланып, 1 апрелдә эштәр башланырға тейеш.

Даими рәүештә ҡабатланып тороуға ҡарамаҫтан, ихаталарҙа һаман да "умырзаялар", йәғни ҡар аҫтында ҡалған ҡулланылмаған автотранспорт саралары таҙартыу эштәренә ҡамасаулыҡ тыуҙыра. Был проблема хаҡында "Автопарковка урындарын тотоу һәм төҙөкләндереү буйынса" МБУ директоры Олег Демченко бәйән итте. Махсус комиссия транспорт саралары ташландыҡ һәм һүтелгән булыуын асыҡлаһа, акт төҙөй. Транспорт сараларын алыу тураһында мәғлүмәт ҡуйыла һәм билдәләнгән ваҡыт үткәндән һуң, әгәр хужа үҙ ирке менән күсерергә теләмәй икән, мәжбүри күсереү тураһында хәбәр ителә. 15 көн үткәндән һуң комиссия тағы ла тикшереү үткәрә һәм транспорт сараһы махсус урынға мәжбүри күсерелә. Бөгөнгә комиссия 2415 ташландыҡ транспорт сараһын тикшергән, шуларҙың 1906-һына иҫкәртеү мәғлүмәте ҡалдырылған. 901 хужа автомобилен күсергән йәки тейешле хәлгә килтергән, 195 транспорт сараһы махсус туҡталҡаға урынлаштырылған. Шуларҙың 60-ы күсереү һәм һаҡлау өсөн хаҡ түләгәндән һуң, хужаларына үҙаллы утилләштереү йәки тергеҙеү өсөн кире ҡайтарылған. Әле комиссия 54 транспорт сараһы буйынса эш алып бара.

Бөгөн мәктәп уҡыусыларында экологик белем һәм мәҙәниәт тәрбиәләү мөһим роль уйнай. Ошо йәһәттән белем биреү процесына "Өфө ЭКО стилендә" тип аталған программа индереү тураһында баш ҡаланың Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова сығыш яһаны: "Бөгөн мәктәп экология буйынса билдәле белем кимәлен формалаштырырға ғына түгел, ә сүп-сарҙы айырым йыйыу фәҙәтен дә өйрәтергә тейеш. Яңы әҙерләнгән программа синыф сәғәттәрендә тематик дәрестәр үткәреүҙе һәм дәрестән һуң алып барылған эшмәкәрлекте үҙ эсенә ала", - тине Елена Хаффазова.

Программаны эшләүҙә ҡаланың Ғилми-мәғлүмәт-методик үҙәге советы, балалар баҡсалары тәрбиәселәре, мәктәп уҡыусылары, өҫтәмә белем биреү педагогтары һәм ғалимдар ҡатнашҡан. Бөгөнгә 1-11-се синыфтар өсөн дәрестәр булдырылған, улар балаларҙың йәшенә ҡарап бүленгән һәм йыл дауамында ай һайын алып барыласаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ҺҮҘ - ҮҘЕНӘ*

## ҺАТЫУСЫ ЛА УЛ!

Бына мин һатыусы. Ҡатын-ҡыҙҙарға хас эш, шулай бит? Беҙ бәләкәйҙән һатыусыны ҡатын-ҡыҙ сүрәтендә күреп өйрәнгәнбеҙ. Был һөнәр ҙә беҙҙән алсаҡлыҡ, аралашыусанлыҡ, йылғырлыҡ талап итә. Ашан магазинының үлсәп һатыла торған тауарҙар бүлегендә эшләйем. Сәй, ҡәһүә, шәкәр, кәнфит, печенье, туҡмас, ярма, аш тәмлеткестәр һатыла был бүлектә. Минең эшем шунан ғибәрәт: аҙыҡ-түлек һалынған һауыттарҙы таҙа тотоу, уларҙы әлдән-әле тултырып тороу, һатып алыусылар менән яҡшы мөғәмәләлә булыу, уларҙы тауар тураһында кәрәкле мәғлүмәт менән тәьмин итеү. Күңелле, эш көнөнөң үткәне лә һиҙелмәй, арыу ҙа һиҙелмәгән һымаҡ хатта. Эш урыны таҙа, йылы. Кеше етешмәгәнлектән, сәскәләр бүлегендә лә ярҙамлашам. Ә был ысын мәғәнәһендә мөғжизә минең өсөн. Сәскәләр менән булышыу, "аралашыу", гөлдәргә һыу һибеү күңелемә тик шатлыҡ-ҡыуаныстар ғына өҫтәй һымаҡ. Күрәһегеҙ, кешене эш урыны түгел, ә эш урынын кеше үҙе биҙәй. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ. Беҙ ҙә һатып алыусыларға яҡшы кәйеф, уңышлы көн бүләк итә алабыҙ. Бер йылмайыу, яҡшы хәбәр менән генә лә. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ, кешелекте дауам иттереүсе булыуҙан ҡала, был донъяны биҙәп, матурлап йәшәүсе лә бит. Мин ошо хәҡиҡәтте йыш иҫемә төшөрәм һәм ысынлап шулай булырға тырышам да.

**Гөлнара ХӘЛИТОВА,**
**һатыусы.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ОКТЯБРЬ РЕВОЛЮЦИЯҺЫ УРАМЫ...

## Иҫке Өфө үҙәге буласаҡ!



**Өфө - үҙенең йәйәүлеләр маршруты булмаған берҙән-бер миллионлы ҡала. "Иҫке Өфө - Башҡортостан мәҙәниәте тупланған урын. Октябрь революцияһы урамында ғына 40-тан ашыу мәҙәни мираҫ объекты урынлашҡан. Шуға ла ул халыҡты ылыҡтырыу урыны, тарихи үҙәкте үҫтереүҙең пилот проекты булырға тейеш", - ти Мәскәү урбанистика үҙәгенең проекттар етәксеһе Оксана Веселкова.**

Ул хәбәр итеүенсә, Өфөнөң Октябрь революцияһы урамында ике маршрут булдырыу ҡарала. Улар йәйәүлеләр өсөн ҙур һәм бәләкәй ҡулсанан торасаҡ. Мәғлүм булыуынса, был урамда мәҙәни мираҫ объекттары бик күп, әммә уларҙы бәйләп тороусы маршрут юҡ. Әлеге ваҡытта яҡынса концепция буйынса урам дүрт өлөшкә бүленгән. Уның тәүгеһенә университет һәм китапхана инә. Таштан төҙөлгән сауҙа биналары йәмәғәт функцияларын үҫтереү өсөн ҙур ҡеүәткә эйә. Өфө Кремле районында - Салауат Юлаев проспекты менән Ҡариҙел йылғаһының яр буйы араһындағы территория - күп функциялы биналар урыны. Шулай уҡ урбанистар ихаталарҙы ла заманлаштырырға тәҡдим итә, йәғни белем биреү учреждениелары эргәһендә улар - йәштәрсә, ә балалар учреждениелары эргәһе уйын майҙаны булырға тейеш.

Архитектор Павел Мазин реконструкция барышында бары тик мәҙәни мираҫты ғына тергеҙеүгә иғтибар биреүҙе дөрөҫ түгел, тип һанай. Туристик кластер булдырыу өсөн ҡаланың транспорт һәм башҡа инфраструктураһын да булдырырға кәрәк. Уның фекеренсә, Октябрь революцияһы урамы - боронғо төҙөлөштәр һаҡланып ҡалған һуңғы урам, проекттың тәү сираттағы бурысы - уны һаҡлап ҡалыу һәм быға дөрөҫ ҡараш булдырыу. "Һуңғы ваҡытта урамдағы объекттар менән эшләүҙең төрлө варианттары тәҡдим ителә: уларҙан һаҡлау статусын алыу эште һәм процедураларҙы ябайлаштырасаҡ. Был хәүефле, сөнки беҙ мәҙәни мираҫты юғалтасаҡбыҙ", - ти ул. Әлбиттә, тарихи үҙәктәге тергеҙеү эштәре дөйөм төҙөлөш эштәренә ҡарағанда ҡиммәткә төшәсәк. Әммә быны эшләргә кәрәк, сөнки ваҡыт ни тиклем оҙаҡҡараҡ һуҙыла, шул тиклем һуңға ҡалыуыбыҙ ихтимал.

Октябрь революцияһы урамындағы мәҙәни мираҫ исемлегендә торған йорттар тәү сиратта милекселәргә шундағы майҙан күләмендә торлаҡ итеп биреләсәк, һуңынан ул торлаҡ булмаған күсемһеҙ муниципаль милек статусына күсәсәк һәм инвесторҙарға тергеҙеү һәм яңыртыу шарты менән 1 һумға һатыласаҡ. Бөгөн инвесторҙар ҡуртымға алған объектты реконструкциялау өсөн сығым сығарғыһы килмәй, шуға шундай юл тәҡдим ителә. Реконструкцияға ете йыл ваҡыт бирелә. Эштәр реставрация проектына ярашлы башҡарылырға тейеш. Бер йортто реставрациялау өсөн кәмендә 50 миллион һум кәрәк.

Өфө ҡалаһының баш архитекторы Олег Байдин белдереүенсә, әлеге ваҡытта Октябрь революцияһы урамында бер генә лә, хатта статусы булмаған объекттар ҙа, емертелмәйәсәк, киреһенсә, уларҙың реестрға индерелеүе күҙаллана. Был 100-ҙән ашыу объекттың һаҡланып ҡаласағы тураһында һөйләй. Урамды реконструкциялау эштәре 2024 йылға тамамланырға тейеш.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тубыҡтар һыҙлаһа

❖ 2 ҡалаҡ кипкән гәрсис һәм үҫемлек майын ҡушып болғап, пар өҫтөндә тотоп йылытырға. Килеп сыҡҡан ҡатышманы полиэтиленға һөртөп, тубыҡҡа ябырға һәм йылы яулыҡ менән урарға. Түҙгән тиклем тоторға. Ошо рәүешле 2 тапҡыр дауаланһаң, һыҙланыу юҡҡа сыға.

❖ Беше тауарҙан ике ойоҡ тегергә һәм төнгөләккә шуны кейеп, табан аҫтына, бот тирәләй ҡайын япраҡтарын тығып тултырырға. Ойоҡто өҫтән ныҡ тарттырмай ғына бау менән бәйләп, йоҡларға ятырға. Тубыҡтар һыҙлағанда 5-10 тапҡыр ошолай дауаланыу яҡшы ярҙам итә.

❖ Бәпембә сәскәһен 1 литр итеп йыйып, өҫтөнә араҡы ҡойорға һәм 10 көн төнәтергә. Төнәтмәне һыҙлаған быуындарға көн һайын ыуырға.

❖ Бәпембә тамырын йыуырға, ваҡ ҡына итеп турарға һәм 1 литр һауытты тултырып һалырға, өҫтөнә сыҡҡансы араҡы ҡойорға. Төнәтмә бер аҙнанан әҙер була, уны һыҙлаған урынға ыуырға. Бәпембә сәскәһе һәм тамырынан әҙерләнгән был төнәтмәләр тубыҡ һыҙлауын да, веналар ауыртыуын да бөтөрә.

### Меңъяпраҡ

❖ 3 ҡалаҡ киптереп ваҡланған меңъяпраҡҡа ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, һауыттың ауыҙын ҡапҡас һәм салфетка менән ҡапларға. Бер сәғәт төнәтеп, һөҙөргә һәм ике балғалаҡ шәкәр өҫтәргә мөмкин. Төнәтмәне геморрой яфалағанда 3 көн дауамында иртәнге аштан һәм йоҡларҙан ярты сәғәт алда эсергә. Был рәүешле йылына 3-4 тапҡыр дауаланырға була. Шулай уҡ меңъяпраҡты ит турағыстан үткәреп, һутын һығып алырға һәм уға 1:1 нисбәтендә бал ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсергә ярай.

### Түбән кислоталылыҡ

❖ Ашҡаҙандың кислоталылығы түбән булғанда 10-ар грамм һары мәтрүшкә, аҡ сәскә, 50 грамм әремде ҡушып ваҡларға. Йыйылманың 2 ҡалағын термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөләккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә һәм дүрткә бүлеп, ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Ҡулдан һуғылған тар туҡыма (26-нан 32 см-ға тиклем) башҡорттарҙан тыш Урта Азияның тар шөйтөлә урынағастар тотонған ярым күсмә төрки халыҡтарына - ҡырғыҙ, төркмән, ҡаралпаҡ һәм Дарваза тажиктарына хас. Волга буйында йылға тамағына яҡын йәшәгән сыуаштарҙың туҡымаһы ла тар булған.

Боронғо төркиҙәрҙә һәм туғандаш ҡәбиләләрҙә йөн туҡымалар етештерелеүҙән яҙма сығанаҡтар дәлилләй. Ҡытай йылъяҙмаларында империя сиктәренән төньяҡҡа ҡарай таралып ултырған төрки-монгол күсмәндәрендә кейем теккәндә йөн төп материал булып тороуы бер нисә тапҡыр телгә алына. Ҡытай хроникаларында "хуннусцы" йорт хайуандары тиреһенән кейенә, "йөн һәм мех кейемдәр менән ҡапланалар"; һундарға туғандаш "ухуаньцы" "төрлө төҫтәге йөн туҡымаларҙан" кейем тегә, уларҙың ҡатын-ҡыҙҙары "йөн туҡымалар... тегә белә"; "тукюесцы" (төрки-тюгю) "мех һәм йөн кейем кейә" тигән мәғлүмәттәр бар. Ҡулъяҙма һәм башҡа тарихи сығанаҡтарға нигеҙләнеп, этнографтар йөн туҡыманан тегелгән халат - сәкмәнде боронғо төрки халыҡтарына хас кейем, тип билдәләй.

Һуңғы осор күсмәндәрендә лә йөн ептән һуғылған туҡыманы ҡулланыу ғәҙәте оҙаҡ һаҡланған. Р.Г. Мөкминованың хеҙмәтендә Урта быуаттар сығанағына (Исфахани) таянып яҙылған һәм беҙҙең эраның II меңъйыллығы башында Дәште-Ҡыпсаҡтың күсмән һәм ярым күсмән халыҡтарында өҫ кейемдәре генә түгел, күлдәктәр ҙә һарыҡ йөнөнән эшләнгән, тигән мәғлүмәттәр бар. Йөн туҡыманан ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар күлдәге тегеү тураһында башҡорттарҙа көньяҡ-көнсығышта - Белорет, Әбйәлил, Баймаҡ, Хәйбулла, Ейәнсура райондарында хәтирәләр һаҡланған.

Этник айырмалыҡтар булыуға ҡарамаҫтан күсмәндәрҙең матди мәҙәниәтендә оҡшашлыҡтар булыуын тикшеренеүселәр йәшәү рәүешенең бер төрлөлөгә, уртаҡ хужалыҡ нигеҙҙәре, алыҫ араларҙа ыҡлайтып быуаттар дауамында аралашып йәшәү, мәҙәниәттәрҙең күсәгилешлегә менән аңлата.

Беҙҙең эраның тәүге яртыһында һәм I меңъйыллыҡ уртаһында йөн төркиҙәр көнкүрешендә генә түгел, Көнсығыш Төркөстан территорияһындағы сактар һәм тоһар ҡәбиләләрендә "боронғо һәм традицион туҡыма" тип иҫәпләнгән. Был төбәктә йөн туҡымалар һәм кейеҙҙәр етештереүҙең масштабы һәм юғары кимәле тураһында уларҙы Ҡытайға сығарыуҙары ла һөйләй, унда был әйберҙәр зиннәтле иҫәпләнгән һәм ихтыяж ҙур булған (ҡытайҙар йөн эшкәртмәгән).

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

АФАРИН!

# УҠЫТЫУСЫЛАР ҘА ЯРЫША...



Финалға сыҡҡан башҡорт теле уҡытыусылары.

**(Башы 1-се биттә).**

➔ **Әлфиә Рәүф ҡыҙы, быға тиклем был һөнәри конкурста көс һынап ҡарағанығыҙ булдымы?**

- Юҡ, "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсында тәүге тапҡыр ҡатнаштым. Быға тиклем һөнәри эҙләнеүҙәрем менән фәнни-ғәмәли, ижади конкурстарҙа әүҙем генә ҡатнашһам да, төп һөнәри оҫталыҡ ярышына батырсылыҡ итмәй торғайным. Бәхтиһән, әҙер булғанмын, әммә ошондай етди конкурста ҡатнаша алырымды аңламай йөрөгәнмен. Был енеү менән 17 йыллыҡ хеҙмәт юлымда атҡарған барлыҡ эшемдең, сит милләт балаларына дәүләт башҡорт телен өйрәтеү йәһәтенән тупланған методикаларымдың, сарыф иткән көсөмдөң буш түгеллеген иҫбатланы.

➔ **Башҡа милләт балаларына башҡорт телен өйрәтеү өсөн тир түгеп, энергияғыҙҙы сарыф итеп эшләүегеҙ үкендермәйме?**

- Нишләптер шулай тура килде, башҡорт телен гел дәүләт теле булараҡ уҡыған кластарҙы миңә тапшыралар. Шулай ҙа былдай үкенес тойғом юҡ. Әлбиттә, туған тел булараҡ уҡытһам, башҡорт балалары араһында йөҙөп эшләр инем. Сөнки ҡайһы саҡта коллегаларға ярҙам итеп, улар урынына туған башҡорт теле дәрестәрен уҙғарған саҡта был балаларҙың бөтөнләй башҡа булыуын тойоп, рәхәтләнеп уҡытып сығам. Әммә хәҙер ике тиҫтәгә яҡын хеҙмәт тәжрибәмдән сығып, ниндәй балаларҙы уҡытҡанда ла тәү сиратта үҙ предметыңа ылыҡтырыу, ә бының өсөн асыҡ күңелле булыу кәрәк, тип әйтәм. Бала шул тиклем һиҙгер, ул һинең кәйефеңде, эшеңә мөнәсәбәтеңде лә күреп тора. Әле конкурс үткән осорҙа лицейға һирәк йөрөнөм, шунда уҡыусыларым күреп ҡалһа: "Ура, Әлфиә Рәүфовна килгән!" - тип шундай шатланып ҡаршылай, уларҙың бына ошо рәүешле яратыуын тойоу һөйөнөслө.

➔ **Һөнәрегеҙҙән һәм эшегеҙҙән уңғанһығыҙ, ә ҡатын-ҡыҙ булараҡ бәхетлеһегеҙме?**

- Әсәй, ҡатын, килен булараҡ бәхетлемен, тип әйтә алам. Сөнки мин кейәүгә сыҡҡанда әсәйем был донъяла юҡ ине, ҡәйнәм мине үҙенең ҡыҙы һымаҡ ҡаршы алды һәм ҡабул итте, шөкөр. Ҡәйнәм һәм ҡайным ғаиләбеҙҙең оло терәге, әле конкурс ваҡытында ла балаларҙы ла ҡараштылар, дәрт өҫтәп көнәш-төнәш тә итеп ебәрҙеләр һәм енеүемә сикһеҙ шатландылар. Ә бына ҡатын булараҡ шуны әйтер инем: гүзәл зат иң беренсе үҙен-үҙе яратырға, ҡәҙерен белергә, күңеле тулы булырға тейеш. Бына шул осраҡта ире лә уны ихтирам итә, ҡәҙерләй, ә иң мөһиме, ҡыҙ балалары өлгө алып йәшәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ваҡыт бик күп ваҡиғаларҙы, кешеләрҙе хәтерҙән юйырға мөмкин, әммә беҙ барыбыҙ ҙа мәктәп партаһы артында ултырып, мөкиббән китеп тыңлаған уҡытыусыларыбыҙҙың исем-шәрифен гел иҫтә тотабыҙ. Бына шундай кескәй йөрәктәрҙә башҡорт теленә ҡарата һөйөү тәрбиәләгән Уҡытыусыларҙың береһе Әлфиә Рәүф ҡыҙы Гәзизова ла.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

*ҺҮҘ - ҮҘЕНӘ*

# ЯҘЫУСЫ ЛА УЛ!



Ҡатын-ҡыҙ яҙыусыға һәр ваҡыт ҡатын-ҡыҙ ғына булып йәшәүе ауыр. Ул, бер яҡтан, үтә лә нескә күңелле, икенсе яҡтан, әҙәр ҡора алырлыҡ көслө, аңлы, ҡатҡыл холоҡтле ла. Әҙәби әҫәр хис һәм тойғонан ғына тора алмай бит, уның структураһы, логикаһы, әҙмә-әҙлеклелеге лә булырға тейеш. Хис менән генә эш итә торған кеше былдайҙы бер ыҙанға теҙеп ҡуя алмай.

Ижад иткән ваҡытта ғына мин тулыһынса бәхетле... эстән. Ә тыштан... яҙышам икән, яҡын юламауҙарын, хәбәр ҡушмауҙарын, шауламауҙарын талап итәм. Уйланып йөрөп онотолам, ваҡыт иҫәбен юғалтам. Был торош көндәргә лә, аҙнаға ла һуҙылырға мөмкин. Геройҙарымды йәлләп түгелеп илап... персонажымдың кисергән уй-хистәренә мауығып китеп, яҙылдарыма асыуланып, кәйефтәрен дә боҙоп ҡуям.

Яҙышыу мине, бер яҡтан, һаҡлай һымаҡ, сөнки тормошта нимә генә булмаһын, ярай, минең геройым ышандырғыс булһын өсөн төрлөһөн дә кисерергә кәрәк, тип үҙемә тигәндә ситкә борам. Шулай уҡ бер ғүмер эсендә әллә күпме яҙмыштарҙы "кисереп" өлгөрәм. Бына, нисектер шулай. Яҙыусы ҡатын-ҡыҙҙарға аңлай, төшөнә белгәндәргә рәхмәтлемен.

**Рәйлә САБИТОВА, яҙыусы.**

*ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ*

# ҠӘЙНӘМ ӘСӘМ УРЫНЫНДА...



Бөгөнгө заманда ҡатын-ҡыҙға бер ниндәй ҙә сикләүҙәр юҡ. Ул телəй икән уҡытыусы ла була ала, машина ла йөрөтә, тракторсы, хатта дальнобойщик та булырға, космосҡа ла осорға мөмкин. Әммә ҡатын-ҡыҙҙың үҙенең төп асылы, төп тәғәйенләнеше - ул барыбер ғаиләнең иң яратҡан, күҙ төбөп торған ағзаһы, ир ҡатыны, бәхетле әсәй булыу. Бына ошо ғаилә үҙегендә йәшәй белгән гүзәл зат айырыуса хөрмәткә лайыҡ. Ошо йәһәттән мәҙхиә һүҙҙәренә иң беренсе минең ҡатыным, шунан ҡәйнәм, ҡыҙым лайыҡ. Әсәйем, ҡыҙғаныҫҡа күрә, күптән арабыҙҙа юҡ инде, ә бына ҡәйнәмде уның урынына ҡалған кеше булараҡ ҡабул итәм. Ул һөнәре буйынса уҡытыусы. Уның йөрәк йылыһы беҙҙе йылыта, көнәштәре тормошҡа дөрөҫ йүнәлеш бирә. Беҙҙең башҡорттарҙа бит кейәү сит ғаиләнән килһә лә, ҡәйнә өсөн үҙ балаһына әйләнә. Кейәү тейеш кеше уның ҡыҙын яратып алған, оҙаҡ йылдар бергә тормош көтәләр, балалар үҫтерәләр икән, ҡәйнә нишләп сит булһын! Бер ғаилә булып йәшәүебеҙгә бына хәҙер 33 йыл, ҡәйнәмдең мине лә үҙ балаһындай яҡын күреүен тойоп йәшәйем. Ул бер байрамда ла мине иғтибарһыҙ ҡалдырмай, беренселәрҙән булып шылтыратып ҡотлай, изге теләктәрен еткерә. Ул бәләкәй саҡтарынан беҙҙең балаларҙы ла тәрбиәләште, уларға туған телдә өйрәтеүсе лә, тәртип-тәрбиә биреүсе лә булды...

Бөтә ҡатын-ҡыҙҙарға ла ғаиләләрендә кәрәкле, барыһын да берләштереүсе, күңел йылыһын өләшеүсе һәм шул уҡ ваҡытта йәмғиәттә лә абруй ҡаҙанған шәхес булыуҙарын теләйем.

**Сынтимер БАЯЗИТОВ,**
**Өфө күп профилле һөнәри колледж директоры.**

**✓ XV быуаттың икенсе яртыһында ҡара-табын башҡорттарының бер өлөшө, Ибәк (Ибраһим) хан ҡыҫымынан ҡотолоу маҡсатында, элек билгән ерҙәрен ташлап, Урал һырттары аша сығып, Кесе Табын олоҫон барлыҡҡа килтерә.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ ИРӘКТЕ - ЯУГИР БАШҠОРТ ЙӨРӘКЛЕ

**Ирәкте ырыуы башҡорттарының хәҙерге варистары Башҡортостандың Тәтешле һәм Балтас райондарында йәшәй, шулай уҡ Татарстан Республикаһының Мөслим районында ла ирәкте башҡорттары нигеҙләгән ауылдар бар.**



Тарихи күҙлектән ҡарағанда, ә быны байтаҡ ҡына этнографик һәм башҡа документаль сығанаҡтар нигеҙендә раҫлап була, ирәктеләр боронғо табын ырыуының, атап әйткәндә, ҡара-табындарҙың айырымланып көн иткән бер тармағы булып тора. Ирәкте шәжәрәләрендә уларҙың ата-бабаларының ҡара-табын башҡорттарынан булыуы хаҡында мәғлүмәт бар. Бында табын башҡорттарының төп бабаһы итеп иҫкә алынған тарихи шәхес Уйшин Майҡы (Байку) бей ырыуға нигеҙ һалыусы шәхес сифатында теркәлгән.

Ирәктеләрҙең яҙма мираҫында (шәжәрәләрендә) һәм башҡа тарихи документтарҙа уларҙың ата-бабаларының заманында Ҡаҙан хандарына яугирлыҡ хеҙмәтенә ялланып, Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш тарафтарында, Ыҡ һәм башҡа ваҕыраҡ йылға буйҙарында ер алып, шунда төпләнеүҙәре хаҡында байтаҡ мәғлүмәттәр бар. Ошо тарихи версия күренекле этнолог Р.Ғ. Кузеев хеҙмәттәрендә лә урын алған. Ирәкте атамаһы әүәл этноним булмаған - ул хандарға хеҙмәт итеүсе хәрби башҡорттарға ҡарата ҡулланыла. Был үҙенсәлекле сословиела төрлө башҡорт ырыуҙары - табын, тамъян, бөрйән һәм башҡа этник берләшмәләр вәкилдәре була, әммә ҡара-табындар күпселекте тәшкил итә. Был фаразды ғалим Р.Ғ. Кузеев та раҫлай. Уныңса, хан хеҙмәтендә йөрөгән башҡорттар ирәкте тигән яңы атама ала, мәғәнәһе буйынса "ҡала һаҡсыһы" тигәнде аңлатып, ваҡыттар үтеү менән ошо атама этнонимға әйләнеп киткән.

Был хаҡта Р.Ғ. Кузеев ошолай яҙа: "Ирәкте ырыуы башҡорттары XV быуат аҙаҡтарында, йәиһә XVI быуат баштарында Ҡаҙан ханлығы сиктәренә күсеп килеп, хан хеҙмәтенә ялланған көнсығыш (ҡара-табын) һәм көнбайыш табындарҙың варистары булып тора". Ғалим ошо заманға ҡараған тарихи сығанаҡтарға, ирәкте (ҡара-табын) шәжәрәһенә, шулай уҡ XIX быуаттың икенсе яртыһында - XX быуат башында йәшәгән һәм ижад иткән, сығыштары яғынан ирәкте башҡорттарынан булған күренекле ғалим-мәғрифәтселәр Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой һәм уның улы Ғарифулла Кейеков әҫәрҙәренә таяна.

Күренекле башҡорт шағиры, языусы, суфый шәйехе Ғәли Соҡорой (Мөхәммәд-`Али бен `Абд Аллах бен Шәриф бен Кийик әл Чукури әл Гари (1826 - 1889) - байтаҡ ҡына поэтик һәм дини әҫәрҙәр авторы, үҙ нәҫеленең шиғри шәжәрәһен яҙа, ҡара-табын ырыуы тарихын да ҡағыҙға күсерә. Уның егерменсе быуын бабаһы Майҡы бей Сыңғыҙ хан идараһы даирәһендә күренекле вәзирҙәрҙән була. Ғәли Соҡорой, риүәйәттәргә ярашлы, өс айырым башҡорт нәҫеленә нигеҙ һалыусы Ҡара Табын, Байҡы һәм Балыҡсы бейҙәрҙе тарихи шәхес булған Майҡы бей уландары итеп күрһәтһә, уның улы Ғарифулла Кейеков 1913 йылда "Шура" журналында баҫылып сыҡҡан "Иҫке шәжәрәнән" тигән мәҡәләһендә Ҡара Табын ҡушаматлы Ҡарағәзизҙең Балыҡсы тигән төүге улының Таныпп, Уннар, Йәлдәк һәм Йәнсәйет исемле улдары булыуы хаҡында бәйән итә. Ә Таныптан Ҡайпан һәм Янапай исемле улдар тыуа.

Балыҡсы һәм Ирәкте олоҫтары ла шул уҡ Ҡара-Табын олоҫо башҡорттарынан айырылып сыҡҡан этник төркөм-кландарҙың административ-территориаль берәмегә булып тора. Был халыҡ ижады өлгөләрендә айырым-асыҡ сағылыш тапҡан:

*"Кара Танып та ер вирде,*
*Ҡара Табын - атам дирде,*
*Ирәктәне ағам дирде,*
*Былар -*
*бер зат бары, сарпай".*

Ғәли Соҡоройҙоң шиғри шәжәрәһендә лә ошоға бәйле юлдар бар: "Асыл бабам Тубыл, Иртыш кәнарында ирмеш..." Тарихи сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, төркиҙәрҙең уйшын (усунь) этник берләшмәһе (Майҡы - Байку бей ҙә ошо көҙем юлбашсыларының береһе булараҡ билдәле тарихи шәхес) ерҙәре Иртыш йылғаһының үрге ағымына тиклем барып етә. Биш төркөмдән хасил булған Майҡы бей олоҫо яугирҙары монголдарҙың Урта Азиялағы һәм Көнсығыш Европалағы походтарында ҡатнаша.

Күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе, яҙыусы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев үҙенең әҫәрҙәренең береһендә табын башҡорттарының ата-бабаларынан булған Майҡы бей яугирҙарының Көньяҡ Уралға табан миграцияһын аныҡ тасуирлап үтә: Майҡы бей Ҡырым һәм Кубань тарафтарын ҡалдырып, Кубань һәм Волга һыуҙарын кисеп сығып, Яйыҡ йылғаһы тамағына килеп сыға. Шунан Яйыҡ йылғаһы буйлап төньяҡҡа, уның үрҙәрендәге ерҙәргә күтәрелеп, Тобол һәм Иртыш йылғалары үҙәндәрен биләп, ҙур хан булып китә. Былдай мәғлүмәттәргә нигеҙләнеп, монгол ғәскәрҙәренең Көнсығыш Европалағы походтары тамамланғас, табын башҡорттары ата-бабаларының Уралға, былдағы оло Башҡорт иленә ҡайтыу юлын асыҡлап була.

Ошо дәүер ваҡиғалары сағылдырылған бер шәжәрәлә былай тип әйтелә: "Сыңғыҙ хан заманында Майҡы бей, Урал тауҙарының Мейәдәк тигән ерендә йәшәп, Мейәс йылғаһы үҙәнендә күсеп йөрөй". Тимәк, ирәктеләрҙең ата-бабалары булған табындар (ҡара-табындар) XIII - XIV быуаттарҙан бирле Көньяҡ Уралда башҡорт иссме менән билдәле булған иң ҡеүәтле халыҡ составына ҡушылып йәшәй башлай. XV быуаттың икенсе яртыһында ҡара-табын башҡорттарының бер өлөшө, Ибәк (Ибраһим) хан ҡыҫымынан ҡотолоу маҡсатында, элек биләгән ерҙәрен ташлап китергә мәжбүр була. Улар, Урал һырттары аша сығып, Кесе Табын олоҫон барлыҡҡа килтерә. Уларҙың бөгөнгө варистары Архангел, Ҡырмыҫҡалы һәм Ғафури райондарында йәшәй.

Әммә Себер ханлығының Шибан олоҫонда сәйәси низағтар дауам итә, был ваҡиғалар Урал арьяғында көн иткән ҡара-табындарҙың тағы ла бер ҙур төркөмөнөң күсеп китеүенә сәбәп була. Әммә улар, кесе-табын башҡорттарынан айырмалы, икенсе юлдан китә. Ғәли Соҡорой "Тазкират ли-ль-ихван ва-ль-ахбаб" исемле әҫәрендә үҙҙәренең Әхмәтшәйех тигән бабаларының Мейәстәге йорттарынан Чусовой йылғаһы үҙәне аша Кама (Сулман) йылғаһы буйындағы ерҙәргә барып етеүе хаҡында бәйән итә. Әхмәтшәйех бабаның яңы ерҙә тыуған ейәненә Сулман бей, тип исем ҡушалар. Улар тәүҙә Ғәйнә башҡорттары биләмәләренән төньяҡтараҡ, булаҫаҡ Уса һәм Оханск ҡалғаләре ерҙәрендә көн итә. Шәжәрәлә раҫланыуынса, "Ғәйнә-баба Сулман бейгә Барҙа йылғаһы үҙәнендә төпләнергә рөхсәт итә", ә был территория ғәйнә башҡорттарының аҫаба биләмәләренә ҡарай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Бөтмәҫ дандары ҡалды

Эйе, ошо тиңдәшһеҙ алыштарҙа йәнен аямаған башҡорт ир-азаматтарының күбеһе, тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта алмай, яу яландарында ятып ҡала. Уларҙың исемлеге лә һис бөткөһөҙ кеүек. Полкташтарының ҡайһы берҙәренең исем-шәрифтәрен 275-се полк комиссары Сәғит Әлибаев үҙенең көндәлектәренә теркәп бара. Һуғыш логикаһы ҡот осҡос: алыштар башланыу менән уҡ егеттәребеҙгә әле кисә генә һин дә мин аралашып-һөйләшеп йөрөгән дуҫтарын ер ҡуйынына тапшырырға тура килә. Мәҫәлән, 1942 йылдың 6 июлендә, атлылар һуғышҡа ингән тәүге көндә уҡ 275-се полкта артбатарея парторгы Исхаҡ Йәнбәков, миномёт расчёты яугиры Ғәйсин, полктың баш ветеринар врачы, майор Сәйфи Рафиҡов, 2-се сабельниктар эскадронының взвод командиры, лейтенант Рәшит Солтанов һәләк була. Һуғыштың тәүге 14 көнөндә, 6 июлдән 20 июлгә тиклем, полк комиссарына һәләк булыусыларҙы береһе артынан икенсеһен үҙенең ялан блокнотына теркәп, яҙып ҡуйырға тура килә. Быны уларҙың исем-фамилиялары: Зәйнулла Әсәҙуллин, Хәниф Ғәлиев, Нурислам Иштуғанов, М.Г. Вәкилов, Ғәлимйән Лоҡманов, Фазыл Хажиәхмәтов, Әкрәм Солтанов, Шәйхи Әминев, Ибраһим Аблаев, Ишмырҙа Ибраһимов, Ғабдулхаҡ Манапов, Лотфулла Әминев, Сәғит Хафизов, Әхмәҙулла Матинов, Ғәлирҙе Тайыпов, Мәғсүм Маликов, Ғабдулла Сатлыков, Әсфәндиәр Ҡанафин, Ихсан Адеев, Закир Кәлимуллин, Фатих Фәхретдинов, Әхәт Әхмәтйәнов, Мостафа Чурбаев, Сәғәҙәт Мансуров, Ғәли Исламғәлин, Ғариф Ғизетдинов, бер туған Борхан һәм Фәхретдин Фәхретдиновтар, Тимербай Дәүләтбаев, лейтенант Сафый Юртынбаев һәм башҡалар. 1942 йылдың авгусында һәләк булыусыларҙан: 3-сө эскадрон командиры, лейтенант Насыр Рәхмәтуллин, сабельниктар - Мирбай Йосопов, Дандин Шадиев, Салауат Ҡылсынбаев, Заһир Ҡотлогужин, Харрас Рәшитов; 25 сентябрҙә сапёрҙар Ғабдулла Әбделхаҡов һәм Нурмөхәмәт Динмөхәмәтов баштарын һала. Байтаҡ ҡына яугирҙар яралана, улар иҫәбендә эскадрон политругы Сөнәғәт Әхмәтов, эскадрон командиры, лейтенант Бәҙри Мәмбәтҡолов, эскадрон парторгы Батыршин, рядовойҙар Ғәбсәләмов, Мусалямов була. 10 - 12 июлдәге бәрелештәрҙә барлығы 30 кеше, ә 29 сентябрҙә иһә бер юлы 35 кеше яралана. Шундай уҡ ауыр юғалтыуҙарҙы дивизияның башҡа полктары ла кисерә: немецтар йәйге айҙарҙа нисек тә булһа Елец һәм Воронеж ҡалалары йүнәлешендә хәл иткес уңышҡа өлгәшергә ашҡына.

Һуғышҡа инеүгә бер ай үтеүгә дивизияға личный составты тулыландырыу өсөн Башҡортостандан өҫтәлмә көстәр ебәрелә башлай. Комиссар С.Р. Әлибаев улар хаҡында ла ентекле мәғлүмәттәр ҡалдырған. 1942 йылдың 5 августында 275-се полкҡа 185 сабельник килә, уларҙың аттары булмай. 17 августа Туймазыла урынлашҡан 9-сы запас атлы полктан тағы ла яугирҙар ҡабул ителә, ә сентябрь урталарында килгән 78 яугир 4 эскадронға бүлеп бирелә. 30 сентябрҙә лә дивизияға өҫтәлмә көстәр килеп етә. Һәр бер полкҡа сафтан сыҡҡан яугирҙар урынына яңылары килә, әлегә дары тәтәнә еҫенә күнекмәгән яҡташтарыбыҙ ут эсенә инә. Ә һуңынанраҡ, 1943 йылдың ғинуар аҙаҡтарында, Сталинград янындағы үлемесле һуғыштарҙа ҡот осҡос юғалтыуҙарға дусар булған дивизияға Башҡортостандағы 9-сы запас полктан составында 700-ҙән ашыу кавалерист булған 3 марш эскадроны килеп ҡушыла.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**Үҙемде виртуаль донъяның фанаты тип иҫәпләмәһәм дә, бер яҡтан, уға бик тә рәхмәтлемен: ваҡытында яңылыҡтар менән танышыу, белешмә рәүешендә файҙаланыу һәм башҡа бихисап мөмкинлектәр өсөн генә түгел. Көтмәгәндә-уйламағанда, шагирыбыҙ һүҙҙәрен үҙгәртеберәк әйткәндә, шундай кешеләр осрай: улар менән танышыу, артабан аралашыу күңелде байыта, сәм өҫтәй, зауыҡты байыта - ғүмүмән, тормошҡа бөтөнләй икенсе күҙлектән - тормоштоң камиллығын, матурлығын һәм ана шул фонда әҙәм ғүмеренең Юғары көс тарафынан тик бер генә тапҡыр бирелгән һәм ...ваҡытлыса ғына булған илаһи Бүләк икәнен аңлауға алып килә. Һәм ана шул ваҡытлыса бирелгән ғүмереңдә асылыңды, уй-ниәттәреңде, барлыҡ ғәмәлдәреңде ошо тормош камиллығы менән яраштырырға, тәртипкә һалырға, унан яҡшылыҡтарҙы ғына алып ҡалырға, тормошоңдо ошо нигеҙҙә үкенмәҫлек итеп ҡорорға ынтылыш тыуа. Хатта бының өсөн һуң булһа ла үҙ булмышыңды һынап өлгөрөп ҡалғы килә. Замандаштарына ғүмер, ваҡыт, ниәт, ғәмәл тәртиптәренең күпселек өлөшө үҙ ҡулында булыуын төшөндөрөргә, ниәттәрен атҡарырға сәбәп итеүсе, ярҙамлашыусы яҡты йөҙлө, яҡшы һүҙле, наҙлы әсәй ҙә, һөйөклө ҡатын да, спортсы ла, тауҙар артылыусы ла булған үҙебеҙҙең сая башҡорт һылыуы - блогер Гөлфиә МӨХӘМӘТДИНОВА менән танышыу ана шундай уйҙарға һалды.**

# ҠУРҠМАЙ ТОТОН...

## икенсе бейеклекте яулауға!



**Бөгөнгө донъябыҙ күҙ алдында үҙгәрә, мәғлүмәт технологияларының юғары тиҙлектә үҫеш алыуы менән бәйле яңы һөнәрҙәр барлыҡҡа килә. Һеҙҙең, Гүзәл һылыу, мәктәптә уҡытыусы булып эшләп йөрөгән ерҙән икеләнеп тә тормаҫтан тормошоғоҙҙо үҙгәртеп, икенсе өлкәлә эш башлап ебәреүегеҙгә нимә сәбәпсе булды?**

- Ысынлап та, ҡасан, нисек, ҡайҙа башланып китте һуң тормошомдағы был үҙгәреш-тәр? Гәҙәттә, бәпәй тапҡандан һуң һәр ҡатын-ҡыҙ йомоланып китә. Мин дә өсөнсө баламдан һуң кәүҙәмдә артыҡ ауырлыҡ һиҙә башланым. Был хаҡта минә әсәйем дә, ирем дә әйтә килде, тик мин ҡул ғына һелтәй торғайным. Шулай ҙа нимә сәбәпсе булды минә тәүге аҙымымды яһарға? Кисекмәҫтән ябығырға ҡарар итеүемә "аҡыллы" үлсәү приборына баҫыуым һәм уның минә... 44 йәш биреү ваҡиғаһымы? Әллә ауылда һарыҡтарҙы ҡайыра алмай тырышып торғанымда 60 йәшлек әсәмдең минән шәберәк йүгереүен күреүме? Әллә иремә: "Мин булдыра алам, мин иҫбат итәсәкмен!" - тип намыҫланыуыммы? Ә иң мөһиме, ябығырға теләгән һәр кешенең теләге, эске көйләнеше булырға тейеш! Шулай итеп, "Ябығам!" тип башланып китте минең үткән йылғы йәйем. Үҙемде ҡулға алдым, интернет селтәрҙәренән төрлө мәғлүмәттәр менән таныштым һәм йыбанмай ғына көн дә ниәтемде атҡара башланым.

Нимә ул дөрөҫ туҡланыу? Беҙ организмыбыҙға кәрәк булмаған аҙыҡ менән үҙебеҙҙе һөҙөндорабыҙ ғына. Тыңҡыслап тултырабыҙ! Ә кешегә сәләмәт булыу өсөн күп тә кәрәкмәй бит. Был, әлбиттә, минең хәҙерге уйҙарым. Ә ябыға башлағанда үҙемдең рациондың "сүп-сарын" күҙ алдына килтерергә өйрәнергә тура килде. Организмға бөтөнләй кәрәкмәгән, файҙаһынан бигерәк зыяны күберәк аҙыҡтүлекте һоғалайым икән мин дә. Мин ана шул ҡый-һайҙан баш тарттым да инде. Һыу эсеүҙе юлға һалдым. Һәм көн дә күнекмәләр эшләп, скандинавса атлай, велосипедта йөрөй торғас, йәй аҙағына ауырлығым кәмей башлағанын тойҙом. Ябығыу барышында әле үлсәнеү ҡайғыһы булманы, үлсәнмәнем. Август айында, бәй, көн дә кейгән кейемдәрем һәлберәй башланы. Тимәк, мин ябығам! Был мине дәртләндерҙе ебәрҙе, артабан камиллашыу юлдары эҙләнем, тик белгес кәңәштәре кәрәк булыуын тоя инем. Шуға ла уҙаллы эшләгән күнекмәләрҙән ялҡып, онлайн йогаға аҡса түләп, 4 ай шөғөлләндем. Декабрҙә үҙ-үҙеңде камиллаштырыу курсы буйынса вебинар, курстар, тренингтар үтә башланым. Бөтәһе 12 мең аҡса түккәнмен, уның ҡарауы, мин уны бишләтә "кире ҡайтарҙым", тип уйлайым...

**Былар бөтәһе лә һеҙҙең былтырғы тарих, ә яңы йылға ниндәй уй-теләктәр менән аяҡ баҫҡайнығыҙ?**

- "Һаумы, Яңы йыл!" тип, йөҙ маҡсат яҙып ҡаршыланым мин уны! Әйтеүе генә анһат, ысынында иһә, өйҙә ултырып, пособие көтөп, тиндәрҙән һумдар һанап, маҡсат тип уйланыуҙар башҡа ла инеп сыҡмай ине әле. Был йәһәттән минә Назгөл ҡыҙым ярҙам итте. "Әсәй, һин нимә тураһында хыялланаһың? Әле нимә эшләгең килә?"- тип һорау бирә минә был бала бер көн. Минең яуап: "Әллә, ҡыҙым, белмәйем..." "Нисек улай? Дельфин да күргең килмәйме ни хатта?" Ошо диалогтан һуң оҙаҡ уйланып йөрөй торғас, йөҙ маҡсат барлыҡҡа килде һәм улар исемлеккә теҙеп яҙып та ҡуйылды.

Маҡсаттарымдың береһе ГТО тапшырыу ине. Хәҙер шуны алтын миҙалға тапшырыр өсөн тырышып күнекмәләр башланым. Шул ваҡыт башҡа бер уй килде: ә нишләп ҡыҙҙарҙы йыйып, бергәләп күнекмә үткәрмәҫкә? Матурлыҡ марафоны тип, бәйләнештәге башҡорт төркөмдәренә тәҡдимдәремде яҙып сыҡтым. Ун ҡатын-ҡыҙ, был үҙебеҙҙең башҡорт ҡыҙы, алдамаҫ, тип, минә ышанып аҡса күсерҙе һәм мин, бисмилла итеп, онлайн күнекмәләрҙе башлап та ебәрҙем. Ватсапта төркөм төҙөп, дөрөҫ туҡланыу серҙәрен аңлатыуҙан башланып китте был марафондар!

Марафон үткәрәм, үҙем шул уҡ ваҡытта ГТО нормаларын тапшырып та йөрөйөм. Карантин, үҙкурсаланыу тип өйгә бикләнгәс тә, мин был сикләүҙәрҙе һиҙмәнем. Минең блогҡа яҙылыусы ҡыҙҙарҙы дәртләндереп, күнекмәләр, тура эфирҙар үткәрәм, эргәләге урманға балаларҙы сығарып йөрөтөп киләм, ә үҙем бәйҙән ысҡынған кеүек йүгерәм. Минең өсөн карантин ваҡытында иң ҡыйыны йүгермәй өйҙә ултырыу булды. Түҙмәнем, сыҡтым, ә тышта яҙғы һауа, һабантурғайҙар йырлаша, их! Бәйҙән ысҡынған эттәй йүгерәм! Шулай итеп, ГТО-ны алтын миҙалға тапшырҙым һәм бер маҡсатымды үтәнем.

**Әйе, үҙегеҙ әйтмешләй, былтыр вирустан хафаланып, күптәр өйҙәренә бикләнде. Тик, күренеүенсә, был һеҙҙе әллә ни өркөтмәгән - тәбиғәткә сәйәхәт иткән фотоларығыҙ ҙа был хаҡта асыҡ һөйләй...**

- Белорет тәбиғәтен үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ: һуштан яҙҙырырлыҡ бит тыуған төйәгем. Ауылда тыуып үҫһәм дә, тормошҡа сыҡҡас, Белорет ҡалаһында йәшәй башланыҡ. Ҡалабыҙға терәлеп тиерлек торған бейек, хозур тауҙар бар, Малиновка тип йөрөтәләр бында уны. Шул тауға ҡарап, һәр саҡ, их, шуның түбәһенә менеп, тирә-яҡҡа бер күҙ һалғанда, тип хыяллана торғас, 20 йыл ваҡыт үтеп тә киткән. Барам, күрәм тип маҡсат ҡуйҙым. Барҙым, иҫемде йыя алмайынса торҙом. Мин тәбиғәт балаһы! Шуны аңланым. Мин тауҙар яратам! Тауға бер артылған кешенең тауҙар менән "ауырыуы" мәңгелеккә ҡала тигәндәре иҫемдә. Минә лә йоҡто ул. Ҡыраҡа, ауылым эргәһендәге Торһай тауы (өс йәшлек улым - Байегетемде йөкмәп мендерҙем), Беренсе Малиновка һәм башҡаларға менеү тантанаһын яҙып ҡына аңлатырлыҡ та түгелдер. Тәбиғәт ҡосағында сир ҡурҡынысы юҡ, сөнки унда ят кешеләр менән түгел, яҡындарың, ғаиләң менән булаһың бит.

**Физик күнекмәләрҙән ҡайһыһы бигерәк тә һөҙөмтәле булды?**

- Йога! Нисек килеп инде тормошома - үҙем дә һиҙмәй ҡалдым. Бик оҡшай! Үҙеңдең организм, тән һәм йән мөмкинлектәрен асыу эске энергияны тағы ла үҫтерә, дөрләтеп ебәргәндәй итә, үҙеңде хөрмәт итә башлайһың. Мин үҙемде ишетә һәм тыңлай башланым. Эске тауыш нимә ти? Үҙеңде яратырға өйрән, ти ул. Марафонда ҡатнашҡан ҡыҙҙарҙы ла шуға өйрәтәм. Ҡыш саңғы ярыштарынан һуң мунса төшөп, мәкегә лә сумдым. Парашюттан ғына һикерергә ҡалды.

**Белеүемсә, һеҙ күп балалы әсә, собханалла. Онлайн дәрестәр, күнекмәләр биреү күп ваҡытты алалыр бит, ғаилә хәлдәрегеҙ нисек?**

- Эйе, мин кейәүҙәмен, өс балабыҙ, өс тағанабыҙ: Батырхан, Назгөл, Байегетебеҙ бар. Тормош иптәшем Наил менән бына инде 17 йыл бергә йәшәйбеҙ, үҙ көсөбөҙ менән йорт һалып сыҡтыҡ. Йәй булһа, баҡса үҫтерәбеҙ, ҡош-ҡорт аҫрайбыҙ. Минә һыйыр ғына етмәй, тип көләм былай ҙа. Ваҡыт үтә лә китә бит. Һағынып яҙҙы көтәбеҙ, яҙ артынан йәйҙең еләк мәле, бесән мәшәҡәттәре менән үтеп киткәнен һиҙмәйбеҙ ҙә. Көҙҙөң һағышлы, рашҡылы көндәренән ялҡып, ҡышты һағынып алабыҙ. Ә ошо мәлдә донъя, балалар тип, беҙ, ҡатын-ҡыҙ, үҙебеҙҙе онотабыҙ. Мин кем? Мин әсәй, тибеҙ. Ә бит балалар үҫеп, ҡош балалары кеүек осоп, таралып бөтә. Шул ваҡытта бына нимә эшләргә? Бергә ҡартайышырға торғанда, ҡартҡайынан да тороп ҡалған япа-яңғыҙ бик күп апайҙарҙы беләм. Мин бер кемгә лә кәрәкмәйем булып сығамы, тип һорау бирә улар. Бер шөғөләм дә юҡ, мин кем һуң хәҙер, тигән ауыр уйҙар менән йәшәп ятҡан апайҙар күп. Минеңсә, ниндәй генә хәлдә лә һәр ҡатын-ҡыҙ үҙе хаҡында онотмаҫҡа тейеш. Беренсе урында - мин ҡатын-ҡыҙ тиеп, үҙенен яратҡан шөғөлө (хобби) менән күңелен күреп, үҙен ҡарап-тәрбиәләп, тормош иптәшен ниндәй йәштә лә йәлеп итерек үҙлекле ҡатын, балаларға өлгөлө әсәй булырға тейеш. Шул ваҡытта балалар ҙа "Әсәй" тип, ир ҙә "Һөйөклөм" тип өҙөлөп торасаҡ. Үҙем шул юлдан үтем һәм әхирәттәремә лә шул хаҡта һөйләйем.

**Был йәһәттән һеҙҙең бөгөнгө эш тәртибегеҙ ниҙәрҙән ғибәрәт?**

- Минең эшем хәҙер блогер булараҡ телефонда. Эйе, социаль төркөмдәрҙә ябыҡ аккаунтта башҡортса күнекмәләр, тура эфирҙар үткәрәм. Марафонда ҡатнашҡан ҡыҙҙар төркөмөндә дөрөҫ туҡланыу, һыу эсеү тураһындағы кәңәштәрем менән уртаҡлашып, мотивация бирәм. Әле мин кандид сирҙәренә ҡаршы марафондар үткәрәм. Кешенең эсендә әллә күпме паразит, токсин, кандид бактериялары тупланған. Уларҙан арыныу өсөн үләндәр һәм махсус препараттар ҡулланыу тураһында кәңәштәр еткерәм. Шулай уҡ көн дә иртән бергәләп күнекмәләр эшләйбеҙ.

**Гөлфиә һылыу, был белемдәргә эйә булыр өсөн махсус уҡынығыҙмы, әллә курстар үттегеҙме?**

- Был һорауҙы минә йыш бирәләр. Һинең медицина белемең бармы, тип һорайҙар. Юҡ, мин бит төп һөнәрем буйынса уҡытыусы! Эйе, мин уҡытыусы инем, тормошомдо ҡырҡа үҙгәртергә ҡарар ҡылдым, ә сәбәбе ниҙән башланыуы хаҡында бынан алда әйткәнем инде: мин ни бары ябығырға ғына теләгәйнем, ләкин сәләмәт тормош рәүеше, үҙеңдең донъяға ҡара-



✓ *Әлеге йәшегеҙгә тағы ун йыл өҫтәп, үҙегеҙҙе күҙ алдына килтерегеҙ. Һеҙ үҙегеҙгә оҡшайһығыҙмы? Ул ваҡытта бер ус дарыу төймәләрен сәғәткә ҡарап эсеп ултырмаҫһығыҙмы? Ҡан баҫымы йонсотмаҫмы? Тубыҡтар һыҙламаҫмы?*

шынды үҙгәртеү, эске камиллашыу баҫҡыстары мине һаман юғарыраҡ кимәлгә әйҙәне лә әйҙәне... Үҙемә башҡа төрләрәк маҡсаттар ҡуйғас, тәүҙә "Диетология-нутрицология" мәктәбендә, артабан башҡа курстарҙа онлайн уҡый башланым. Шулай итеп, мин үҙ юлымды таптым, тип уйлайым, сөнки блогер булыу минең бөтөн булмышымды биләп алды. Минең кешеләргә әйтер һүҙем бар икәнен тойҙом. Ошо арала төп эш урынымдан китеүем тураһында ғариза яҙып, ҡыуанып ҡайттым. Арттағы бер ишек ябылды, ә алдымда бишәүһе асылды! Яңы мөмкинлектәр, яңы офоҡ! Ул офоҡто мин социаль селтәрҙәрҙә, шәхси блогымда күрәм.

**Сер булмаһа, быйылғы йылға ниәттәрегеҙҙе аса алыр инегеҙме?**

- Бер ниндәй сер ҙә юҡ, сөнки мин милләттәштәрем, замандаштарым өсөн тырышам. Заман менән бергә атлап, социаль селтәрҙәрҙә үҙемдең барлығымды белдереүем миңә бары тик яңы тормош, яңы үрҙәр асты, яңы дуҫтар менән танышыу шатлығы, йөкмәткеле аралашыуҙар бүләк итте. Мин башҡорт ҡыҙы һәм блогымды башҡорт телендә алып барам. Минең бар уйҙарым, булмышым, ижадым - шул блогымда. Юғары һүҙ, пафос тип ҡабул итмәгеҙ, шуны әйтергә теләйем: минең миссия - үҙебеҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ярҙам итеү, башҡорт блогерҙарын үҫтереү.

**Гәзит уҡыусыларға ниндәй кәңәш-тәҡдимдәрегеҙҙе еткерер инегеҙ?**

- Ошоға тиклем "Киске Өфө" гәзитен йыл һайын алдырып, бик яратып уҡыным. Әле, бая әйтеп китеүемсә, яңы урында төҙөгән йортобоҙҙа йәшәп ятабыҙ, шуның менән бәйле беҙҙең тарафтарға почта ташыуҙа ҡыйынлыҡтар килеп сыҡты, ләкин был ваҡытлыса булыр, тип уйлайым һәм яратып уҡыған гәзитем менән араны өҙмәҫкә иҫәп. Гәзит уҡыусыларға нимә әйтер инем? Тормош матур! Һәр көндө шул матурлыҡты ҡойма ямғырҙа ла, әсе буранда ла, эҫе көндә лә күрә беләйек. Әлеге йәшегеҙгә тағы ун йыл өҫтәп, үҙегеҙҙе күҙ алдына килтерегеҙ. Һеҙ үҙегеҙгә оҡшайһығыҙмы? Ул ваҡытта бер ус дарыу төймәләрен сәғәткә ҡарап эсеп ултырмаҫһығыҙмы? Ҡан баҫымы йонсотмаҫмы? Тубыҡтар һыҙламаҫмы? Ана шулар булмаһын өсөн бөгөндән үҙегеҙҙе ҡулға алығыҙ! "Ҡый-һай" , файҙаһы аҙ булған аҙыҡтарҙан баш тартығыҙ, спорт менән дуҫлашығыҙ. Шул ваҡытта ун йылдан һуң да үҙегеҙҙе йәш, көслө тойорһоғоҙ, тормош матур тип ҡыуанып йәшәрһегеҙ. Быйыл бар донъяны йонсотҡан сир сигенер барыбер, һәр хәлдә, уға бирешмәҫ өсөн күңел күтәренкелеге, ыңғай көйләнеш юлдаш булһын, ә иң мөһиме - күңелебеҙ бейеклектәренә артылырға тырышып, маҡсат ҡуйып йәшәйек - шул саҡ бер ниндәй һынауҙарға ла бирешмәбеҙ. Бирһен Хоҙай!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әңгәмәләште.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# КЕМДӘР ГЕНӘ ҒАШИҠ, АЙ, БУЛМАҒАН...

**Бөгөн ифрат популяр булған һөнәрҙәрҙең береһе - парикмахер һәм визажист, йәғни бөҙрәханала сәстараш һәм һөрмә тартыусы эше. Замананың әүрәткес заңына ҡаршы барып булмай, сөнки был һөнәрҙәр кешеләрҙең төҫ-башын һәм тормошон биҙәп-төрләндереп кенә ҡалмай, ә күптәрҙең күңелен үҫтерә һәм зауҡын ҡытыҡлай.**





...Парикмахер сәнғәте, декоратив косметика, тырнаҡ моделе һәм дизайны буйынса XXIII Рәсәй чемпионатының финалы бара. Бөтә Рәсәй кимәлендәге бәйгегә тәүләп эләккән башҡорт ҡыҙы Элеонора Ғәлләмова алдынғы ун оҫта иҫәбенә инһәм дә ярар ине, тип еңеүселәр исемлеген иғлан итеүсенең тауышына ҡолаҡ һала. "Подиум макияжы" тигән номинация буйынса чемпиондар саҡырыла башлай. Өсөнсө урында Курск ҡалаһы визажисы, икенсе урында Ырымбур оҫтаһы. "Булманы, ахыры, еңеүсе даны эләкмәне", тип уйлап торһа, кинәт үҙенең исеме яңғырап китә. Беренсе урында - Өфө ҡалаһынан Элеонора Ғәлләмова!

"Ҡайсаҡ кеше үҙенең мөмкинлектәрен үҙе лә белеп бөтмәй, тигәндәре ысын һүҙ, шундай ҙур бәйгелә майҙан тоторға насип булғас, еңеү шатлығын да алып ҡайтырға кәрәк тә инде", тип яҡындарыма һөйөнсөләнем, - ти Элеонора. - Минең атайым менән әсәйем Ейәнсура районының Иҙәш ауылынан, ә мин үҙем Иркутск өлкәһенең Усть-Кут ҡалаһында тыуғанмын, йәғни мине Ҡот тамағы тигән йылғаның "һыуынан тотоп алғандар". Аҙаҡ ғаиләбеҙ менән Ырымбур өлкәһенә Новотроицк ҡалаһына күсендек. Бәләкәстән үк "парикмахер булам" тинем дә йөрөнөм, мәктәптә уҡығанда ла хыялымды йәшермәнем, бөтә әхирәттәрем дә белде. Әсәйем менән апайым минең теләкте хупланы, ә атайым бигүк оҡшатманы, юғары белем алырһың, "йүнлерәк" профессия һайларһың, тине. Туғыҙынсы синыфты тамамлағас, ул мине урта мәктәптә унынсы класты уҡырға үҙе етәкләп алып барҙы, әммә ике аҙнанан мин ныҡышланып парикмахерҙар мәктәбенә күсеп ултырҙым. Байтаҡ уҡығас ҡына атайыма әйтергә тура килде, яйлап ҡына күнде инде, ҡалайтһын..."

Элеонораның бәхетенә, остазы бик тәжрибәле була, шул арҡала ҡыҙ ун ете йәшендә Новотроицк ҡалаһының иң престижлы салондарының береһендә парикмахер-сәстараш булып эшләй башлай. Матурлыҡ индустрияһында юлын дауам итеү маҡсаты менән 2013 йылда Өфө ҡалаһына күсеп килә. "Өфөлә миңә яңы офоҡтар асылды, - тип һөйләй Элеонора. - 2014 йылда сәстараш сәнғәтенең "Алтын тараҡ" Өфө чемпионатында ҡатнаштым һәм "Прогрессив мода" номинацияһында беренсе урынды яуланым. 2017 йылда Ырымбурҙа үткән Рәсәй чемпионатында бер юлы өс номинацияла еңеп сыҡтым - өс беренсе урынды алдым: "Подиум макияжы", "Йәш кәләш макияжы" һәм "Авангард прическа" буйынса иң уңышлы эштәр авторы булдым. Хәҙер инде артҡа юл юҡ, алда тик Мәскәү! Чемпионаттың Мәскәү этабында талапсан жюри-баһамандар алдында макияж-бит биҙәлеше генә түгел, уның аша тотош образды асып күрһәтергә тейеш инек - бит биҙәлешенә ярашлы күлдәк, аксессуарҙар һәм прическа ла уйлап табырға кәрәк ине. Етмәһә, йәнә бер ҡатмарлы шарт: был образ билдәле ваҡыт арауығында "тыуырға" тейеш. Мәҫәлән, подиум макияжын тулыһынса күрһәтеү өсөн ҡырҡ биш минут ваҡыт бирелә. Чемпионат алдынан аҙна буйы ғәләмәт тығыҙ минуттарҙы һанай-һанай, көсөргәнешле тренировка-әҙерлек осоро барҙы..."

Һәм уңыш йылмая тырыш башҡорт ҡыҙына: 2017 йылда ул "Подиум макияжы" буйынса Рәсәйҙең абсолют чемпионы исемен яулай, беренсе урынды ала, шул уҡ бәйгелә "Кәләш макияжы" эше менән икенсе урынға сыға. Артабан яңы ярыш-конкурстар теҙмәһе башланып китә. 2018 йылда Элеонора Ғәлләмова Германияға Дюссельлорф ҡалаһына Европа чемпионатына бара. Бында ул дүртенсе урынға күтәрелә һәм Европаның биш иң оҫта визажисы топ-рәтенә баҫа.

"2019 йылда минең өсөн айырыуса әһәмиәтле ваҡиғалар булды, - тип дауам итә Элеонора, - мине Өфөләге күп профилле һөнәри колледжға эшкә саҡырҙылар - Визаж һәм Стилистика компетенцияһын йүнәлешен ныҡлап үҫтерергә кәрәк ине. Ни бары ике генә йыл барған Визаж һәм Стилистика компетенцияһы бөгөн айырыуса ҡатмарлы, сетерекле һәм бәхәсле профессиональ хеҙмәт йүнәлеше тип һанала. Ни өсөн тигәндә, матурлыҡ индустрияһы бер урында ғына тормай, көнө-аҙнаһы менән үҙгәрә, яңынан-яңыға төрләнә. Бик күп көс һалып һәм ныҡышмалыҡ менән эшләгәнгә күрә генә беҙҙең колледжда Визаж һәм Стилистика компетенцияһы тамам нығынып китте. Беҙҙең өйрәтеү базаһына нигеҙләнеп, бөгөн унда квалификация арттырыу курстары эшләй, демонстрациялы-күргәҙмәле имтихандар үтә, төрлө чемпионаттарға әҙерлек тренировкалары ойоштола. Миҫал өсөн, парикмахер сәнғәте һәм декоратив косметика буйынса Рәсәй чемпионатына әҙерлек этабы, Рәсәй регионында WorldSkills чемпионаты, Рәсәйҙең милли WorldSkills чемпионатында ҡатнашырлыҡ оҫталар әҙерләү..."

Шулай итеп, оҫта визажист һәм үҙе артынан күп йәштәрҙе әйҙәрлек остаз булып киткән Элеонора Ғәлләмова ижади тормошоноң яңы үрҙәренә менә. Уны Өфө күп профилле һөнәри колледж директоры Сынтимер Баязитов тәүге көндән үк бик яҡшы теләктәр менән хуплап-дәртләндереп ҡаршы ала. "Аллаһы Тәғәләнең фатиxаһы, етәкселәрҙең, коллегаларҙың ярҙамы менән мин 2020 йылда Халыҡ-ара мастер дәрәжәһен алыуға өлгәштем һәм донъяның ун топ-визажистары рәтенә баҫтым. Һәм мин был кимәлдә генә туҡтап ҡалмам, Аллаһ бойорһа, Донъя чемпионатында ҡатнашып, тәүге өс урындың береһен яуларға иҫәбем бар".

Бына шундай талантлы һәм сая, ынтыматлы ҡыҙҙарыбыҙ эшләй матурлыҡ индустрияһы сафында. Уларҙың уңыштары - беҙҙең шатлыҡ, ғорурлыҡ булып, Башҡортостандың, тыуған халҡының бәрәкәтен арттырһын.

**Сәрүәр СУРИНА.**

*ҺҮҘ - ҮҘЕНӘ*

# ЖУРНАЛИСТ ТА УЛ!

Ҡатын-ҡыҙға журналист булыу еңелдән түгел тип уйлайым. Сөнки һуңғы йылдарҙа был һөнәр эйәләре араһында гүзәл заттар өҫтөнлөк итһә лә, мин барыбер журналистика ир-егеттәр шөғөлө тигән фекерҙәмен. Шуға ҡарамаҫтан, һәр ерҙәге кеүек, Башҡортостанда ла журналист һөнәрен һайлаусылар араһында ҡатын-ҡыҙ өҫтөнлөк итә килә. Әйткәндәй, күптән түгел, дөрөҫөрәге былтыр йыл аҙағында үткән Башҡортостан журналистарының 22-се съезында ла делегат ҡатын-ҡыҙҙар күберәк ине. Күптән түгел мине БДУ-ның журналистика кафедраһына уҡытырға саҡырғайнылар. Унда ла студенттар араһында ҡыҙҙар күберәк булыуына иғтибар иттем. Күрәһең, ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас тәүәккәллек, үҙһүҙлелек һәм һәр ваҡыт башҡалар өсөн яуаплылыҡ алырға ынтылыу бында ла үҙенекен итә.

Бәләкәй саҡта минең журналист булам тиеүемә ғаиләләге өлкәндәр ҡаршы ине. Ләкин минең өйгә килгән һәр гәзит-журналды йотлоғоп уҡыуым, радио-телевизорҙан яратҡан тапшырыуҙарымды көтөп ултырыуымды күрепме, күнделәр. Хәҙер ҡай саҡта ваҡыт етмәүгә зарлана башлаһам, әсәйем: "Ярай, үҙең теләп һайлаған эшең бит", - тип ҡырт киҫә. Шуға өндәшмәйем һәм ысынында мин эшемде, һайлаған һөнәремде бик яратам. Былтыр Башҡортостандың дәүләт теле-радио тармағында эш башлауыма 30, телевидениеға килеүемә 25 йыл тулды. Ошо оҙаҡ дәүерҙә мин радио комментаторы, телевидениела иртәнге "Сәләм" тапшырыуының алып барыусыһы һәм етәксеһе булып эшләнем, ижтимағи-сәйәси темаларға төрлө тапшырыуҙар, документаль фильмдар авторы булып сығыш яһаным. Яңылыҡтар хеҙмәте хәбәрсеһе булараҡ, республика һәм илебеҙ төбәктәрен арҡырынан буйға йөрөп сыҡтым, тиһәң дә була. Эшемдең һәр мәле күңелгә матур хәтирәләр булып уйылып барыуына бик бәхетлемен.

Күптәр миңә, нисек һин үтә яуаплы эшеңдә лә, ғаиләңде ҡарап та өлгөрәһең ул, тип һорай. Өлгөрмәйемдер ул, тим шаяртып. Ә инде етди яуапҡа килгәндә, ғаиләм - ҡәлғәм булғанға инде. Улдарымдың атаһы минең төп терәгем һәм ярҙамсым. Элегерәк мин командировкаларға йышыраҡ йөрөгәндә ул балаларҙы хәстәрләп кенә ҡалмай, тәүлектең ҡайһы ваҡыты булыуға ҡарамаҫтан, мине тәғәйен урында көтөп ҡаршы ала торғайны. Ғөмүмән, улдарым минең журналист булыуыма бик ғорурлана. Бергә эшләгән хеҙмәттәштәремде лә яраталар, экрандан күрһәләр, туғандарын күргән кеүек шатланалар. Бергә-бергә татыу ғүмер иткәнгә эш ауырлығы ла һиҙелмәй. Ғөмүмән, яратҡан эш ауыр булмай бит ул...

**Гөлдәриә ЙОСОПОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған киң мәғлүмәт хеҙмәткәре.**

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Республикабыҙҙа иң йәш, шул уҡ ваҡытта иң әүҙем ағзалар тупланған йәмәғәт ойошмаһы бар. "Ағинәй" тип ҙурлап исем ҡушылған уға. Ағинәй вазифалылар күп булмай, әммә һәр башҡорт ҡатын-ҡыҙы шул Ағинәй дәрәжәһендәге инәйҙәре, өләсәй-әсәйҙәре тирәләй тупланып, уларға арҡа терәп, уларҙа күргән сифаттарҙы аңына, буйына һеңдерә ала. Шундай юҫыҡта, шундай маҡсатта ойошҡан булған борон халҡыбыҙҙағы аҡһаҡалдар мәктәбе лә, ағинәйҙәр ҡорҙары ла. Шул традиция-йолаларҙы тергеҙеү, дауам итеү бурысын бөгөн үҙ иңенә йөкмәгән республика райондарында, ҡалаларында ҡорға тупланған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ. Һүҙ - Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Сәғит ҡыҙы СОЛТАНБАЕВАға.**

# БЫЛ БЕРЛӘШЕҮ...

## ҡатын-ҡыҙҙы үҙ асылына әйҙәне



➔ **Һеҙ Учалы районында "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһын тәүге көндәрҙән етәкләйһегеҙ. Ошо йылдар эсендә эшләнгән эшегеҙҙең һөҙөмтәһен нисегерәк баһалар инегеҙ?**

- Йорт ҡапҡалары ғына түгел, кешеләрҙең күңел ҡапҡалары ла бикләнеп, тормош ниндәйҙер һоро төҫкә ингән саҡ ине. "Ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы булдырайыҡ, бергә ойошайыҡ, милләт киләсәген ҡайғыртыу менән булышайыҡ. Ойошмабыҙҙың исеме "Ағинәй" булыр", - тигән саҡырыу менән Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева шәхсән һәр районға барып етеп, ойошмаға етәкселәр һайлатып, эште ойоштороп ебәреүенә күп тә түгел, аҙ ҙа түгел, 10 йыл да булып китте. Бөгөн беҙ республикабыҙҙа яҡшы танылған йәмәғәт ойошмаһы. Эшебеҙҙе халыҡ та, етәкселәр ҙә баһалай. Тимәк, ошо йылдар эсендә башҡарған эштәребеҙгә "яҡшы" билдәһен тартынмай ҡуйырға була.

Тормошобоҙға бермә-бер йәм өҫтәне, күңелдәргә дәрт һәм гәм һалды был берләшеү. Беренсенән, йорттарына бикләнеп, сараһыҙлыҡтан ни эшләргә белмәй баҙап ҡалғандарҙы бергә тупланы. Уртаҡ фекерҙәр, матур уй-маҡсаттар барлыҡҡа килде. Икенсенән, ҡыҫҡартыу салғыһы аҫтында китапханаһыҙ, мәктәпһеҙ ҡалған ауылдарҙа ла тормош йәнләнеп китте. Ҡул эштәренә лә тотондоҡ, тарихыбыҙҙы өйрәнәбеҙ. Йола тотҡан яҙлыҡмаҫ, тигәндән, аныбыҙ төбөндә бикләнеп ҡалған күпме матур йола тергеҙелде ошо осор эсендә. Уны беҙ сәхнә өсөн, йә берәй конкурста ҡатнашыу өсөн түгел, ауыл халҡы менән бергә йолалау өсөн файҙаланабыҙ. Күренекле шәхестәребеҙҙе, батырҙарыбыҙҙы тел осонан да төшөрмәй балаларыбыҙға һөйләп торайыҡ, башҡорт тамырын ҡоротмайыҡ, тип тә көс һалабыҙ. Ошо йылдар эсендә ауылды, ауылдаштарҙы күҙ менән ҡаш араһында тоторға, ҡайһы тәңгәлдә ярҙамыбыҙ кәрәк, шунда йүгереп барырға, үҙебеҙҙе бер нәмәгә лә битараф булмаған, милләттең рух сығанағын һаҡлаусылар итеп тойорға, эшләргә өйрәндек. Ҡайҙалыр махсус теркәлмәһәк тә, баштан уҡ волонтер ролен дә үҙебеҙгә алғанбыҙ икән. Һәр ауылда тиерлек ҡараусыһыҙ ҡалған ҡарт-ҡоро бар. Уларҙы тәрбиә ҡылыу ҙа беҙҙең иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Өсөнсөнән, район эсендә лә, районлар араһында ла аралашыу беҙҙе берләштерә, үҫтерә, яңы матур эштәргә ылыҡтыра. "Ағинәй" ойошмаһындағы ҡатын-ҡыҙҙарға "мүкләнеп" ятырға һис тә форсат юҡ.

➔ **Бер район хакимиәте башлығының ағинәйҙәр эшен күҙәтеүҙән һуң ошондай һығымта яһауы тураһында әйткәйнеләр: "Һеҙ ағинәйҙәр башҡаларҙы тәрбиәләй-тәрбиәләй үҙегеҙҙе лә тәрбиәләйһегеҙ, шулаймы?" - тигән ул. Ойошма ағзаларының хәҡиҡәте ошомо? Үҙегеҙҙә, башҡаларҙа ниндәй үҙгәрештәр тояһығыҙ?**

- "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы халҡыбыҙ яңы заманға яраҡлаша алмай ҡаңғырған, күңелде тукландырыусы рухи аҙыҡ тураһында ҡайғыртыу артҡы планға күскән бер мәлдә бик ваҡытлы барлыҡҡа килде. Әммә йәмғиәттә ошо атама тәрлә ҡараштар ҙа тыуҙырҙы: 30 ғына йәште ашатлаған ҡатын-ҡыҙ ағинәй була аламы, йә булмаһа, оло йәштәге әбейҙәр генә был исемгә лайыҡмы. Хатта бер саҡ юлдаш радиоһынан танылған ғына журналисыбыҙ ауыҙынан да ошо ойошмаға ҡарата ризаһыҙлыҡ билдәләре сығып ысҡынды. Йәнәһе лә, боронғоға ҡайтыу бөгөнгө көн талабы түгел, артҡа ҡарау үҫеште туҡтата. Бөгөн килеп мин шуға инандым: ағинәйлек, аҡһаҡал аҡылы ул беҙҙең ҡаныбыҙға һалынған. Ул - беҙҙең асылыбыҙ икән. Тик тормош мәшәҡәттәре күмеп киткән бер мәлдә ошо холоҡ-фиғелебеҙгә хас матур һыҙат та аныбыҙ төпкөлөнә күскән. Бөгөнгө бай рухи хазинабыҙ, тәрбиә мәктәбе, тулыһынса булмаһа ла, ағинәй, аҡһаҡалдар һүҙе менән быуындан-быуынға мотлаҡ тапшырылып килеп еткән бит. Уларҙың оло бурысы булған ул. Был матур сифат та барыһында ла бер тигеҙ кимәлдә лә булмайҙыр ул. Яуаплылыҡ тойғоһо юғары булғандары ил инәһе, ағинәй, аҡһаҡал дәрәжәһенә еткән дә инде.

Эйе, ошо ойошмаға ағза булып ингән һәр кем үҙен лайыҡлы тоторға тырыша. Бер ауылда матур ғына сара ҡарап ҡайтып киләбеҙ. Беҙҙең менән бер машинала барған баяусы юл ыңғайында: "Район ауылдарындағы ағинәйҙәр үҙ-ара аралашҡанда нисектер үҙгәреп киттеләр, үтә сәсрәп торғандары баҫалҡыланыбыраҡ ҡалды. Магазинда булһынмы, почтала булһынмы, һүҙҙәрен үлсәп кенә һөйләйҙәр. Тәрбиәле генә апайҙарға ҡарап тороуы күңелле", - тип баһа бирҙе.

Икенсе бер ауылда төп ағинәй: "Йәй кис булһа, эш-көш бөткәс, рейдҡа сыға башланыҡ. Урамға сығарып түгелгән сүпсарға ла, артыҡ ныҡ шау-шыуға ла иғтибар итәбеҙ. Ҡыйыш яткан бер нәмә лә күҙ уңынан ысҡынмай. Ауыл халҡы тиҙ иғтибар итте быға. Ағинәйҙәр күреп ҡалмаһын, тип, берен-бере үҙе уҡ тыя башланы. Абруйыбыҙ бар икән дәһә", - тип һөйләне. Быңдай миҫалдарҙы бик күп килтерергә була. Эйе, ҡаныбыҙҙа булып та, инде ойоп ятҡан ағинәйлек сифаттары, унайлы мәле еткәс, аңыбыҙ төпкөлөнән шифалы бер шишмә булып килеп сыҡты. Уны бер нисек тә кире ҡағып булмай. Быңа шуға күрә бөтә республикаға таралды ошо шауҡым, һәр районда гөрләтеп эшләй бит ағинәйҙәр.

Ҡайһы бер ауылдарҙа йәшен дә, олоһон да үҙ янына туплаған урта йәштәрҙәге ҡатын-ҡыҙ етәкләй ағинәй ойошмаһын. Инде 10 йыллап эш алып барған бындай ойошма етәксеһе, һис һүҙһеҙ, тәрбиәле, тотанаҡлы, сабыр, эскерһеҙ булыуы менән үҙенә ылыҡтырып, тартып тора бит башҡаларҙы. Уға ылыҡҡандар ҙа унан өлгө ала, үҙен тәрбиәләй. Беҙҙең Ҡунаҡбай, Юлдаш, Көсөк-Маяҡ, Килмәк, Мәскәү, Мансур, Бөйҙә, Иҫке Байрамғол, Илсе, Зәйнәкәй, Сораман ауылдарындағы ойошмалар ағзалары һәр кемде һоҡландырырлыҡ. Тимәк, кешене йәше түгел, ә йәмғиәттә үҙен тотоуы, аҡылы, аң кимәле ағинәй дәрәжәһенә күтәрә.

Үткәргән сараларыбыҙ ҙа тәрбиәләй беҙҙе. "Өләсәйҙең күңел һандығы", "Әсәйем нәсихәттәре", "Атай абруйы - алдан", "Яулыҡ - ҡатын-ҡыҙ биҙәге", "Һаулығың үҙ ҡулыңда", "Хәмер эскән - хур булған", "Әсһәң шарап - булырһың харап" кеүек саралар үҙе тәрбиәүи маҡсатты күҙ уңында тота. Был саралар барыһы ла балалар менән берлектә үткәрелә. Ошондайыраҡ сараларҙа мин уҡыусыларҙы, уларҙың ҡарашын күҙәтергә яратам. Өләсәйҙәр, олатайҙарын тыңлағанда күрһәгеҙ ине уларҙың осҡонланып янған күҙҙәрен. Быңа шулай әкренләп асылыбыҙға ҡайтабыҙ, Аллаға шөкөр.

➔ **Заман халҡыбыҙҙың бик күп йолаларын, йәшәйеш ҡағиҙәләрен, хатта үҙ асылын онотторға яҙғайны. Ошо ҡиммәттәрҙең күпмеһендер ҡайтарыуға ағинәйҙәр үҙ өлөшөн индереүен күреп, белеп торабыҙ. Хатта һеҙ барлыҡ ошо бурыстарҙы үтәргә тейешле ойошмаларға, мәсәлән, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә өлгө күрһәттегеҙ...**

- Беҙ, Учалы районы ағинәйҙәре, мәшһүр эпосыбыҙҙың алтын юлдарын үҙебеҙгә девиз итеп алғанбыҙ: "Донъяла мәңге ҡалыр эш - ул да булһа яҡшылыҡ". Бөгөн башҡорт халҡына ҡағылған һәр нәмәне һаҡлап, яҡлап ҡалыу өсөн тырышлыҡ һалабыҙ. Юғиһә, Ғайса Хөсәйенов әйтмешләй, был китабыбыҙ ҙа, йылдар дауамында битләре төшөп, тәләфләнеп йоҡарып бара ине.

Иң тәүҙә милли кейемгә иғтибар йүнәлде. Сәхнә кейеменән айырылып торған, һәр элементына башҡорттоң аҡылы, фәлсәфәһе, зауҡы һалынған бай, затлы кейемдә тергеҙебеҙ. Ағабыҙ үҙе генә ни тора! Республикала "селтәр" һүҙе менән генә таралып китә яҙған был биҙәүесебеҙ әкренләп һәр төбәктә үҙ атамаһы менән атала башланы. Тел байлығын да һаҡлап ҡалдыҡ. Сигеүле алъяпҡыс, күлдәктәр аңыбыҙҙа татар халҡыныҡы ғына булып ҡалып килә ине. Баҡтиһәң, башҡорт ҡатын-ҡыҙы ла матур итеп сигеп, ҡайып кейгән кейемдә. Учалы яғы күлдәктәре бер нисә итәкле булып, элмәле сигеү һалғанда, биҙәк эсе тултырып сигелмәй икәнен белдек. Тәбиғи туҡымаға ошондай сигеү һалып тегелгән күлдәкле ағинәйҙәр үҙе бер йәм. Флүр яулыҡ, ҡушъяулыҡ ябынабыҙ хәҙер. Яулыҡ флүр йә ҡуш булһын өсөн дә үҙ сере бар уның: таҫмаһын дөрөҫ баҫырға, инесен һалырға, әйәк бауын да шартына килтереп бәйләргә кәрәк. Кейемгә, уның эшләнеү алымдарын өйрәнеүгә баш көлә сумдыҡ тип әйтә алабыҙ. Аяҡ кейемебеҙ - сарыҡ, ҡатаны эшләргә лә йәһәт кенә өйрәнә һалдыҡ. Шартына килтереп, тулаһын һуғып, уны баҫып алғас, үксә бороу эшенә тотонаһың. Ҡысмауын ишеп, бер нисә төҫтән суғын ҡуйып ебәрһәң, күнгә ултыртылған был аяҡ кейеме иф-

рат шәп килеп сыға. Ваҡытынды йәлләмәй, күҙ нуры түгелгән, байтаҡ ҡына сығым талап иткән бындай кейем балаларыбыҙға иҫ киткес бай ҡомартҡы. Эш барышында халҡыбыҙҙың шул тиклем матурлыҡты, нәфислекте яратыуын, һәр нәмәне күңел һалып башҡарыуын төшөнөү ҙә ҙур кинәнес. Ә күпме тел байлығы ҡайтанан телмәргә күсте! Был өлкәлә беҙ мәҙәниәт ойошмалары менән бергә эшләйбеҙ. Улар иғлан иткән сараларҙа һуңғы йылдарҙа төбәккә ярашлы кейем әҙерләп ҡатнашыу ҙа эште йәнләндерҙе. Үкенес, тажлы вирус бер ни тиклем эште туҡтатты.

Үрҙә әйтеп киткәнсә, йолаларҙы беҙ ауыл халҡы тормошонда ҡулланыу өсөн тергеҙәбеҙ. Районда мәсеттәрҙә никах уҡытыуҙа, балаға исем аҙанлатҡанда ағинәйҙәребеҙ ҙә ҡатнаша. Мәскәү ағинәйҙәре башлап ебәргән ине, башҡалар ҙа күтәрмәләп алды был йоланы. Халыҡҡа, йәштәргә бик оҡшай. Науруз ағинәйҙәре Ризаитдин Фәхретдиндың нәсихәттәрен шиғыр юлдарына һалып алып, никахта бик оҫта файҙаланалар. Килен төшөрөү, һандыҡ асыу, һыу башлау, килен сәйе кеүектәренә лә ағинәйҙәрҙе саҡырып ҡына торалар. Үҙебеҙҙең башҡорт туйының һәр элементын тәфсирләп йыйыу өҫтөндә лә эшләйбеҙ. Бәлки, мөмкинлек тапһаҡ, йыйынтыҡ итеп баҫтырып алырға ла ниәтебеҙ бар. Халҡыбыҙ имтомға ла маһир булған бит. Беҙҙең ошо байлығыбыҙ ҙа юғалыу өҫтөндә. Был өлкәлә лә эш башланған. Мансур, Бөйҙә, Көҙәй ауылы ағинәйҙәре күпмелер белешмә йыйып, оҫталыҡ дәрестәренә лә саҡырҙы инде. Арала ҡулы им-томға килешкәндәр булһа, асылып китерҙәр, тигәндән эшләйбеҙ быны.

Артҡа әйләнеп ҡараһаң, үҙебеҙ өсөн дә, халыҡыбыҙ мәнфәғәтендә лә байтаҡ эш башҡарылған. Милли кейемебеҙ менән ҡыҙыҡһынып, оҫталар дәрәжәһенә күтәрелгәндәр ҙә бөгөн ағинәйҙәргә рәхмәт әйтерлектәре бар. Милли кейемгә ихтыяжды ағинәйҙәр тыуҙырҙы, улар башланы был эште.

**➔ Милләт бишеген тирбәтер йәш ҡыҙҙарыбыҙға ағинәйҙәр нәсихәте ниндәй булыр?**

- Милләт бишеген тирбәтер ҡыҙҙарыбыҙ һәр яҡтан да үҫешкән, белемле булырға, заман менән бергә атларға тейеш тип уйлайым. Гәмле, сәмле башҡорт ҡыҙы мотлаҡ башҡорт ғаиләһе ҡорһон, көйләп кенә торған туған телдә бишек бәүетһен, ил ҡото, милләт ҡото булырҙай балалар үҫтерһен. Илһөйәр, телһөйәр, эшһөйәр, затлы-бәсле тоҡом әсәһе булып, ил инәһе дәрәжәһенә етергә яҙһын ҡыҙҙарыбыҙға.

Форсаттан файҙаланып, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһында торған бар ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы байрам менән ихлас ҡотлайым. Һаулыҡ-сәләмәтлектә донъя йәме, милләт ҡото булып, эшегеҙҙән кинәнес алып йәшәргә яҙһын һәр берегеҙгә.

ЯҢЫ РУБРИКА: "ҒАИЛӘМ ҠОМАРТҠЫҺЫ"

# КҮҢЕЛ ДАУАҺЫ ӨЛӘШКӘН...

## ҡот һәм бәрәкәт бит улар



**Хәтеремдә, бер саҡ өйгә ҡайтып инһәм, әсәйем менән атайым икәүләшеп өләсәйҙән ҡалған сулпыларҙы сүкеп, йәтешләп, яңыртып ултыра. Уларҙың ошо кәсебе миңә ул саҡта сәйер генә тойолғайны.**

Хәҙер генә аңлайым: ҡомартҡы әйберҙәргә ифрат ҡеүәтле йәшәү көсө, йәме һаҡлана. Зат-ырыуҙы ҡурсалаған, ырыҫ арттырған, үҙебеҙҙе мөхәббәтле иткән ҡомартҡылар сикһеҙ байлыҡ та ул. Ҡомартҡы әйберҙәр нурға мансылып, күңел дауаһы өләшкән гәжәйеп ҡот та ул. Шатлыҡ һәм ҡыуаныс бөркөп, ғаилә һәм донъя бәрәкәтен үҫтергән илаһи көс тә улар.

Ҡомартҡыны мотлаҡ һаҡларға кәрәк, ти торғайны ололар. Һаҡламаһаң, бәрәкәт бөтә, ҡот китә, тип тылҡығандары ла иҫемдә. Әсәйем заманында башына, үҙе әйтмешләй, ҡаҡ түбәгә батмус ултыртып бейеп, дан яуланы. Башҡорттар көн дә тотонған, аш-һыу бүлмәһенән сығышмаған алюмин батмустар һәр өйҙә булды. Әсәйемдең батмусы ҙур ине, алты пар сынаяҡ теҙеп, башына нисектер йәтешләп ултырта ла, ипле генә, талғын елпеү хәрәкәттәр башҡарып, ҡулдары менән батмусын сиртеп, бейергә төшөп китер ине, тип һөйләй ололар. Мин бәләкәй инем әле, уның сәхнәлә сығыштарын күрмәнем, әммә олоғайғас бер бейетеп, камераға төшөрөп алдым. Өләсәйемдең бейеүе башҡасараҡ булған, ул башына һыу тултырылған стакандар ултыртып бейегән. Һыуы берҙә генә сайпылмауына кеше хайран ҡалыр булған. "Советская Башкирия" гәзитенә баҫтырып сығаралар өләсәйҙең бейеүе тураһында мәҡәләне. Етмешенсе йылдар башында әсәйем Фатима Сөләймәнованы Өфөнән килеп, телевидениеға төшөрөп алалар. Ошондай хәтирә-ҡомартҡылар ҙа бар ғаиләбеҙҙә.

Ә матди ҡомартҡыға килгәндә, әсәйем дүрт-биш тапҡыр яңыртып эшләгән шау мәрйенле селтәрен миңә ҡалдырҙы. Ҡабатлап йүнәтеп, һүтелгән урындарын тегеп торҙо. Ошо мәрйендәрҙе һыйпаһам, күңелем йүнәлеп, тирә-яҡ яҡтырып киткәндәй тойола, ти торғайны. Бейеүсе булғанғамы икән, йыш ҡына башҡорт күлдәге тектереп ала ине. Камзул тектереп, тәңкәләр баҫып, күңелен шуның менән йыуатты. Хәҙер мин әсәйемдең башҡорт милли кейемдәрен кейеп, улым менән фотосессия үткәрәм. Ете аҡыллы беләҙеген үтә лә ныҡ оҡшатам, минең беләктәр өсөн кин, тағып йөрөрлөк түгел, юғалтырмын тип ҡурҡам. Әммә йыш ҡына тотоп, ҡараштырып алам. Йәнгә йәм һирпкәндәй тойола. Ни тиһәң дә, әсәйем таҡҡан, атайым нығытып сүкеп биргән биҙәүестәр бит. Селтәрҙең һәр мәрйенендә әсәйемдең күҙ нуры һаҡланғайҙай тойола. Тәсбих әсәйемдең атаһы Хәлфетдин олатайымдыҡы, Ҡөрьән китабы ла унан ҡалған ҡәҙерле ҡомартҡы. Әсәйемдән тағы ҙур тәңкә мираҫ булып ҡалды, бер яғына алтын ялатылған. Ул 1732 йылғы. Түшемдә оҙаҡ тағып йөрөй торғайным, йоҡара икән, ололар әйтеүенсә, көмөшө кәмей.

Һуңғы йылдарҙа ҡытын-ҡыҙҙарыбыҙ шул өләсәйҙәр, әсәйҙәр таҡҡан селтәр, һаҡал, яғалаҙы тергеҙә. Башҡортҡа улар бик ҡәҙерле. Беҙҙең яҡтарҙа һандыҡ төптәрендә һаҡланып яткан бик боронғолары ла бар был биҙәүестәрҙең. Бик үк кешегә күрһәтеп тә бармайҙар. Улар был ҡомартҡының ҡот һәм бәрәкәт икәнен аңлай. Ҡомарҡы биҙәүестәр миңә әлеге тажҙәхмәт ҡоторған ваҡытта ла ныҡ ярҙам итте, тиһәм дә хата булмаҫ. Улар менән яҡынлаштым, ҡомартҡы һандыҡтан оҙаҡ һаҡланып яткан әйберҙәрҙе сығарып-сығарып ҡарап алыу ысынында күңелгә дауа булды.

Әсәйемдең һүҙҙәре күңелемә уйылған: "Намыҫың булһа, бер биҙәүесте лә һатма һәм юғалтма. Һуғыш йылдарында халыҡ ас ултырһа ла иҙән аҫтында шау мәрйенле, көмөш тәңкәле селтәрен һаҡланы. Кемдең һыйыры бар, шулар астан үлмәне. Кемдең селтәре бар, шуларҙың рухы һынманы", - ти торғайны. Һәр ҡомартҡы биҙәүестең йорт нигеҙенә бәрәкәт һәм ҡот биреп торғанына һис тә шигем юҡ....

Әйткәндәй, бер бөртөк ысын дингеҙ ҡортбашы ла ҡәҙерле ҡомартҡы, уны мин гелән аҡса янсығымда йөрөтәм. Яңыраҡ уҡығайным: ҡортбаш борон аҡса урынына йөрөгән икән, әйтәм, күҙ теймәһен, янсығымда аҡса бөтмәй...

**Мәҙинә ЯҠУПОВА.**
**Әбйәлил районы.**

**Редакциянан:**

**Ғаиләгеҙҙә ниндәй ҡомартҡылар һаҡлана? Әйҙәгеҙ, шулар тураһында яҙып ебәрегеҙ. Ҡомартҡылар тарих һөйләп кенә ҡалмай, улар ғаиләгә ҡот һәм бәрәкәт тә бирә, ти бит әлеге мәҡәләнең авторы. Ә һеҙ ҡомартҡыларҙы нисегерәк баһалайһығыҙ һәм һаҡлайһығыҙ?**







ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАУА БЫСРАҠ ИКӘН...

■ Һауа бысраныуы кеше сәләмәтлеге өсөн хәүефлегә әйләнә бара. Бигерәк тә 2,5 микрондан ҙур булмаған аэрозоль өлөшсәләр зыянлы, ти ғалимдар. Был өлөшсәләрҙе һауаға башлыса ҡаҙылма яғыулыҡтар ҡулланып эшләүсе сәнәғәт, энергетика, транспорт бүлеп сығара. Кешенең бер бөртөк сәсе ҡалынлығынан 30 тапҡырға бәләкәйерәк булған был өлөшсәләр үлем осраҡтарының күбәйеүенә килтерә. Лондондың Гигиена мәктәбе докторы Кэтрин Тонн билдәләүенсә, бөтөн Европала яңы эшкәртеү ҡоролмалары ҡулланыу һөҙөмтәһендә һауаны бысратыусы матдәләрҙең кимәле күтәрелә. Шуға ла һуңғы йылдарҙа Көнсығыш Европа халҡы араһында инфаркт һәм инсульттан үлеүселәрҙең һаны 20 процентҡа артҡан. Белгестәр фекеренсә, экологик яҡтан таҙа төбәктәрҙә йәшәүселәр йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә дусар булмай.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, тәбиғи рәүештә уяныу будильникка ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Бының өсөн бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, бер үк ваҡытта торорға ғына кәрәк. Ә ҡапыл уяныу организм өсөн оло стресс. Будильникты һүндереп, тағы йоҡлап китеү шулай уҡ насар, сөнки йоҡлап китергә ярҙам итеүсе гормондар уянырға ярҙам итеүселәре менән буталып бөтә, ә бынан кеше үҙен тағы ла насарыраҡ тоясаҡ.

■ Клиник психолог Рамани Дурвасула әйтеүенсә, ҡәһүәнең ниндәй төрөнә өҫтөнлөк биреүенә ҡарап, кешенең холҡон билдәләргә була. Мәҫәлән, классик ҡәһүә яратыусылар үтә дөрөҫ йәшәүсе, талапсан булып ҡыланыусылар рәтенән. Улар киҫкен, түҙемһеҙ була, үҙгәрештәрҙе яратмай. Латтеға өҫтөнлөк биргәндәр ярҙамсыл иҫәпләнә. Ниндәй һорау менән мөрәжәғәт итһәң дә, уларҙан гел ярҙам көтә алаһығыҙ. Әммә был кешеләрҙең юҡҡа көйөп барыу кеүек сифаты ла бар. Артыҡ талапсандар капучино ярата. Улар хис-тойғоға бай, бар нәмәне контролдә тоторға тырыша, үҙҙәренең сәләмәтлеген дә яҡшы һаҡлай. Ирей торған ҡәһүә еңел холоҡ, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе аҙаҡҡа ҡалдырырға яратыусы кеше тураһында һөйләй. Ә һалҡын татлы ҡәһүәне социаль яҡтан ҡыйыуҙар эсә. Улар, ғәҙәттә, күп нәмәне уйламайынса хәл итә.

■ Ҡытайҙа һөттөң антиканцероген сифаттарын асыҡлаған тикшеренеү үткәрелгән. Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үҫеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған. Ферменттың эффекты уның концентрацияһына, яман шеш күҙәнәктәренә тәьҫиренең күләменә һәм оҙайлығына бәйле. Тикшеренеүҙең авторы Вэй Чжен Чен әйтеүенсә, был асыш ашҡаҙан яман шешенә ҡаршы препараттар уйлап табыуға булышлыҡ итәсәк. Элегерәк оло кешеләр өсөн һөт зарарлы тигән ҡараш йәшәй ине, әммә белгестәр белдереүенсә, һөттө самаһын белеп ҡулланыу организмды онкологик сирҙәрҙән һаҡлай.

АЙЫҒАБЫҘ!

**Яңыраҡ редакциябыҙға Башҡортостан юлдаш телевидениеһында тапшырыуҙа ҡатнашҡандан һуң Баймаҡ районы Түбәнге Яйыҡбай ауылы вәкилдәре гөрләшеп килеп инде. Ҡунаҡтар менән аралашып, уларҙың дәртенә, ихласлығына, тыуған төйәктәре тураһында шундай оло һөйөү менән телгә алыуҙарына һоҡланып ултырып ҡалдыҡ. Уларҙың тап ошо фиҙаҡәрлеге быйылғы "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыуға этәргес булған да инде. Ветеран-педагог, ауыл мәсетенең имам-хатибы Рәмил Хәсәнов, ағинәйҙәр Фирҙәүес Хәсәнова, Рәйлә Йәһүҙина һәм ауылдың йәмәғәт әүҙемсеһе Рәмзиә Бәхтиева ошо конкурс сиктәрендә үткәргән саралар тураһында беҙгә бәйән итте.**

# МЫЖЫМАЙБЫҘ, ЙЫБАНМАЙБЫҘ, ҮСЕКМӘЙБЕҘ...

## һәм алға, тик алға!

**Рәмзиә Бәхтиева:** "Айыҡ ауыл" конкурсының төбәк этабына әҙерлек, ошо әһәмиәтле конкурста ҡатнашырға теләүселәрҙе районда теркәү башланғас, Түбәнге Яйыҡбайҙың старостаһы Рәил Хәсәнов был мәсьәләне сходта күтәреп сыға. Уның һүҙен күтәрмәләүселәр ҙә, икеләнеп ҡалыусылар ҙа табыла. Әммә ауылыбыҙҙың Фирҙәүес Хәсәнова етәкселегендәге әүҙем ағинәйҙәре был идеяны хуплап тауыш биргәс, ир-егеттәр ҙә ҡушылып, ыңғай ҡарар ҡабул ителә. Беҙ ҙә апайым Рәүилә Хәсәнова менән атай нигеҙе урынлашҡан ауылдың киләсәгенә битараф ҡала алманыҡ, бында ойошторолған тәүге сараға - Апай шишмәһендә өмәгә йыйындыҡ та килдек. Шулай итеп ҡушылып киттек был хәрәкәткә. Әйткәндәй, өмә барышында ауылыбыҙ эргәһендәге Апай шишмәһенең үҙәнен таҙартып, инешенә будка ултыртып, тирә-яғын кәртәләп, шул ҡоролмаларҙы буяп-ялтыратып ҡуйҙыҡ. Бына шулай тын ғына, һәүетемсә генә йәшәп ятҡан ауыл халҡы былтырғы йылдың августынан тынғыһыҙ, дәрт-дарманы ташып торған, ойошҡан бер командаға әүерелде лә китте.

**Фирҙәүес Хәсәнова:** Ауылыбыҙ бәләкәй, рәсми ҡағыҙҙар буйынса 34 йорт ҡына һанала. Халыҡ һаны ла күп түгел. Бына шуға ла үҙ көсөбөҙ менән был конкурсты йырып сыға алырбыҙмы икән, тип икеләнеберәк тә ҡуйғайныҡ. Әммә Баймаҡ районы кимәлендә ғариза биргән 89 ауылдың 34-е ҡатнашып, беҙ еңеп сыҡҡас, артҡа сигенеү юҡ, тип эшкә тотондоҡ. Айыҡлыҡ йәмғиәте булдырҙыҡ һәм сәләмәт, айыҡ тормошто пропагандалау маҡсатындағы эшмәкәрлеккә нигеҙ һалдыҡ. Ағинәйҙәрҙең эшен йәнләндереп ебәрҙек, Ир-егеттәр советы булдырҙыҡ һәм унда ике тиҫтәгә яҡын уҙаман ағза булып теркәлде.

**Рәмил Хәсәнов:** Түбәнге Яйыҡбай ауылы XXI быуат өсөн бик үҙенсәлекле тораҡ пункт ул. Бай тарихлы ла, үҙенең борондан килгән йолаларын, көнкүреш ғәҙәттәрен, үҙенсәлеген дә тулыһынса һаҡлап ҡалған. Ауылға Бөрйән улысы Үрге Урал өйәҙе башҡорттары нигеҙ һалған. Ауылдың атамаһы йорт старшинаһы Яйыҡбай Мырҙашев исеме менән 1876 йылдан билдәле. Үткән быуат башында ауылыбыҙҙа ике манаралы мәсет төҙөлә, ул үҙе бер үҙенсәлекле тарихи ҡомартҡы, республикала иң боронғо иман йорттарының береһе. Ә бөгөнгө көнкүрешкә килгәндә инде, Түбәнге Яйыҡбай ысын мәғәнәһендә эко-ауыл. Унда һаман да өйҙәрҙе утын яғып йылыталар, мәктәп, балалар баҡсаһы, фельдшер-акушер пункты, клуб, магазин кеүек социаль әһәмиәтле объекттар юҡ, урамыбыҙға ут та үтмәгән әле. "Айыҡ ауыл" республика конкурсында ҡатнашып, еңеүгә ынтылыуыбыҙҙың да сәбәптәре бына шунда: ауыл халҡының көнкүрешен яҡшыртыуға, уңайлы шарттар булдырыуға мөмкинлектәр тыуҙырыу. Ә былай, шөкөр, самогон эшләп һатыусылар менән көрәшәһе түгел, улары ла юҡ беҙҙә.

➔ **Ауыл бәләкәйме-ҙурмы, әммә халыҡты битарафлыҡтан арындырыу, күнегелгән йәшәйешен бөтөнләй үҙгәртеп, ҡуҙғытып ебәреүе еңел түгел. Үҙегеҙҙең тәжрибәгеҙ менән бүлешегеҙ әле.**

**Рәмзиә Бәхтиева:** Ғәҙәттә, бәләкәй ауылдар тыныс ҡына йәшәп ятыуҙы хуп күрә. Шуға ла был "Айыҡ ауыл" республика конкурсында ҡатнашыу һымаҡ сарала уңыш яулау өсөн әүҙемлек, ойоштороусыларҙың тынғыһыҙлығы кәрәк. Һин ул эште йөрәгең аша үткәреп, финанс сығымдарына ҡарамай, бөтә ваҡытыңды шуға бүлеп эшләгәндә генә һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин. Беҙ баштан уҡ еңеүгә ынтылып шулай эшләнек. Башҡаларға эшебеҙҙең һөҙөмтәле буласағына ышаныс уята алдыҡ, һәм ярҙам ҡулы һуҙыусылар ҙа табылды. Былтыр "Айыҡ ауыл" республика конкурсында икенсе урын яулаусы Баймаҡ районы Йылым ауылынан Гөлйемеш Хөрмәт ҡыҙы Ишмурзина беҙгә куратор итеп тәғәйенләнгәйне, ул йүгереп йөрөп эшләй, эште алып бара. Гөлйемеш Хөрмәт ҡыҙына бик тә рәхмәтлебеҙ. Ауылдың старостаһы Рәил Хәсәнов, Ирмәк Ураҙбаев, Сәғит Йәһүҙин, Алтынғужа Кәримов, Айрат Баязитов, Хисмәтулла Суфиянов, Айрат Бибиниязов, Фирүзә Хажина, Рәйлә Йәһүҙина, Мәрфуға Уразбаева, Сафия Суфиянова һәм башҡа ауылдаштар бигерәк әүҙемдәр, береһен атап, береһен онотоп ҡалдырырға ла ҡурҡам. "Айыҡ ауыл"да ҡатнашырға теләк белдергәс тә ауылдаштар үҙҙәренә шундай ҡағиҙәләр билдәләне һәм шуға буйһона: мыжымайбыҙ, йыбанмайбыҙ, һөйләнмәйбеҙ, үсекмәйбеҙ һәм алға, тик алға!

**Рәйлә Йәһүҙина:** "Айыҡ ауыл"дың ойоштороу комитетын булдырғас та төҙөгән план буйынса алып барҙыҡ эште. Тәү сиратта район һәм республика кимәлендәге бөтә сараларға, акция-конкурстарға әүҙем ҡушылдыҡ, шунан уларҙы үҙебеҙҙә лә ойошторҙоҡ. Ауыл урамында шашка буйынса ярыш үткәрҙек. Унда балалар ҙа, ололар ҙа дәррәү ҡатнашты, уйнай белмәгәндәрен уйнарға өйрәттек, иҫтәлекле бүләктәр, дипломдар тапшырҙыҡ. Шунан "Таҙа Һаҡмар" акцияһына ҡушылып, Һаҡмар үҙәне буйлап утыҙ биш кеше саңғыларҙа ҡышҡы спартакиада эстафетаһын Бикеш ауылына алып барып тапшырҙыҡ. "Ғаилә ҡышҡы уйындары" үткәрҙек, унда олоһо-кесеһе тюбингтарҙа шыуҙы.







**Фирҙәүес Хәсәнова:** Ғинуарҙың 23-өндә "Ҙур хоккей" ярышы үткәрҙек. Был сараны барыһы ла оҡшатты: ситтән килгәндәр ҙә, килә алмай социаль селтәрҙәр аша ҡараған яҡташтар ҙа һоҡланыуын белдерҙе. Хоккейҙа 3 команда көс һынашты, уларҙың һәр береһенә айырылып торған төҫтә еләндәр, ҡамсат бүректәр кейҙерҙек. Күл өҫтөндәге боҙға башта олораҡ ир-ат милли кейемдәрҙә килеп сыҡты, шунан йәштәрҙе әйҙүкләп сығарҙылар, егерме өс тапҡыр республика, алты тапҡыр Рәсәй чемпионы, спорт мастеры Фәнил Әминев комментатор булды - бер һүҙ менән әйткәндә, йығылып китерлек булды. Әбйәлилдәрҙең хоккей командаһы беҙгә оҫталыҡ дәресе күрһәтте. Ике тирмә ҡорҙоҡ һәм береһендә күргәҙмә ойошторһаҡ, икенсеһендә ауылдың уңған хужабикәләре аш-һыу әҙерләне, ете еҙ самауыр борлап ҡайнап ултырҙы. Был сараға ситтән ҡунаҡтар күп килде һәм саңғыла йөрөү, бура һуғыу, уҡ атыу, тройкала, һыбай йөрөү һәм башҡа традицион уйындар менән бик күңелле үтте.

31 ғинуарҙа "Сәләмәтлеккә 2021 аҙым" тип, ҡатын-ҡыҙҙар Апай тауының башына мендек һәм тау башында теләк теләп төштөк. 3 февралдә "Ҡатын-ҡыҙҙың бәхет биләмәһе" проектын ойоштороҡ, уның сиктәрендә районда 20-гә яҡын төрлө белгестәр килде, улар араһында врачтар, юрист, психолог, парикмахер, косметолог, китапхана хеҙмәткәрҙәре булды. Мин талҡан эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе күрһәттем.

**Рәмзиә Бәхтиева:** 13 февралдә "Ир һүҙе - ил һүҙе" тигән йыйын ойошторҙоҡ, унда үҙебеҙҙең Баймаҡ, күрше Әбйәлил, Йылайыр, Хәйбулла районлары башҡорттары ҡоролтайҙары рәйестәрен, "Айыҡ ауыл" конкурстарында еңгән ауылдарҙың ир-егеттәр ҡорҙары рәйестәрен саҡырҙыҡ. Ә 14-е көндө традицион яндан уҡ атыу конкурсы уҙғарҙыҡ, был күркәм бер спорт байрамына әйләнде. Ошо көндәрҙә "Ете ҡыҙ" матурлыҡ һәм саялыҡ байрамы ла ойошторҙоҡ.

**➔ Аҙнаһына бер нисә сара уҙғарып, арып та киткән осраҡтарҙа яңынан эшкә тотонорға нимә көс-дәрт бирә?**

**Рәмзиә Бәхтиева:** Дөйөм мәнфәғәт өсөн ауылдың ололары ла арымай-талмай тырыша, ул юҡ, был юҡ тип тә тормайҙар. Бер башлаған эште аҙағына еткерергә кәрәк бит, сәм йөрөтә беҙҙе. Беҙҙә сәмле халыҡ йәшәй, "Беҙ булдырабыҙ!" тибеҙ. Унан ҡала, ойошторған сараларҙың халыҡ күңеленә ятыуы, эшебеҙҙе баһалай белеүҙәре лә күңелгә дәрт өҫтәй. Беҙ район этабында ғына 89 сара үткәрҙек. Шуларҙың береһе - "Иман нуры" конкурсы булды, һөҙөмтәһе иҫ киткес: быға тиклем мәсет тупһаһын ашаҡланып үтергә баҙнат итә алмай йөрөгән ауылдаштарҙы ылыҡтырҙыҡ, балалар Ҡөрьән аяттарын, сүрәләрҙе ятланы. Был да бит бер тәрбиә мәктәбе.

Ғөмүмән, ауылда ошо ойоштороу эштәре менән йөрөгәндә яҡындан белмәгән ауылдаштар менән танышып, көнкүрештәрен, һулыштарын тойоп, бер-беребеҙгә яҡынайып киттек. Яңы йыл алдынан "Зәңгәр ут" тамашаһы үткәргәйнек. Шунан алда һәр йортҡа инеп, ғаилә ағзаларын матур башҡорт милли кейемдәренә кейендереп, ир менән ҡатынын ҡулға-ҡул тотондороп, бер-береһенә ҡаратып ҡуйып, ҡотлау һүҙҙәрен әйттерҙек. Аҙаҡтан инде әҙер видеоны ҡарап, эй оҡшаттылар, хатта ҡайһы берҙәре: "Беҙ былайтып бер-беребеҙгә ҡарашып торғаныбыҙ ҙа юҡ ине", - тип рәхмәттәрен әйтте. Бына шундай ихлас баһа алып торғас, эшләргә теләк һүрелә буламы инде!

**➔ Ир-егетте бөгөн ниҙәр борсой?**

**Рәмил Хәсәнов:** Йөрәгендә башҡортмон тигән ир-егетте нимә генә борсомай икән? Урманға сыҡһаң - тирә-яҡ мөхит борсой, халыҡ араһына инһәң - көнкүреше, мәсеткә инһәң - динебеҙ киләсәге, балалар менән булғанда уларҙың киләсәге борсой. Борсомаған нимә генә бар икән, бармаҡтың ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта. Бигерәк тә ауылдарҙа ир-егеттең эшһеҙлеге, күптәренең ғаиләһенән айырылып, ситтә аҡса табырға тырышып йөрөүе уйландыра. Ҡайһы берҙә илау түгел, сеңләп китерҙәй булаһың. Ҡулыма ҡурайымды алһам, ошо "Урал"ды урын-еренә еткереп кем йырлар икән, тип борсолам. Үҙем дә битололарҙың сеңләп ултырып илағандарын күрҙем, Урал өсөн, ил, киләсәк өсөн көрәштек бит, тип илай ине улар. Беҙҙең бөгөн ошолай тырышып йөрөүебеҙ - йәштәр күрһен, ишетһен, белһен өсөн бит ул. Айыҡлыҡҡа ла 80 йәшлек кешене бик күндереп булмай, ә бына балаларҙы тәрбиәләргә кәрәк. Бар маҡсаты шул түбәнге яйыҡбайҙарҙың.

Беҙҙең төбәктә бик күп көйҙәр, таҡмаҡ, йырҙар сыҡҡан һәм бына беҙ, минең быуын кешеләре, ололарҙан уларҙы бер ни тиклем отоп алып ҡала алдыҡ. Бына шул моңобоҙҙо, тарихыбыҙҙы, халыҡтың ауыҙ-тел ижадын йәштәрҙе тәрбиәләүгә файҙаланыу, күңелдәренә һеңдереп ҡалдырыу зарур. Кешенең йөрәгендәге бетен ҡуҙғатырға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә", тип халҡыбыҙ борондан белмәйенсә әйтмәгән шул. Түбәнге Яйыҡбай ауылының халҡы ошо хәҡиҡәткә асыҡ миҫал: бәләкәй ауылбыҙ, оло йәштәгеләрбеҙ, мәҙәни сара уҙғарырға майҙансыҡ та юҡ, тип бер ҙә зарланып тормағандар. Ниәт иткән эшкә әмәле лә табылған, ауылдан сыҡҡандар тыуған нигеҙҙәренә йән өрөргә теләп, был эштән ситтә ҡалмаған. Уларҙың ауыл киләсәген хәстәрләп һалған тырышлығы, моғайын, бушҡа китмәҫ, маҡсаттары тормошҡа ашыр!**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺӨЙӨҮ ЮҒАРЫҒА КҮТӘРӘ -

## һиңә шунда булырға кәрәк тә

Шарттар ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, яратыусы булып ҡал. Мөхәббәт - ул хуш күңеллелек түгел, ә буйһондороусы, еңеүсе көс. Әгәр кемдер һиңә ҡарата ғәҙел булмаһа, рәнйетһә, был кешене кисерергә өйрән. Кисерә белеү мөхәббәттең бер өлөшө ул. Эстән генә, был хәлдән һабаҡ алдым, тип һығымта яһа.

Үҙ тормош тәжрибәңә ҡарашың мөхәббәттең асылын нисек аңлауыңды билдәләй. Әгәр уны аңлаһаң, тимәк, һин кисерергә һәләтлеһең, һәм, ахыр килеп, бөтәһе лә яҡшы буласаҡ.

Үҙеңде уратып алған бөтә нәмәне лә яратырға өйрән. Тормош тәжрибәң һиңә мөхәббәттең асылын аңларға ярҙам итәсәк. Күптәр башҡаларҙы тәнҡитләп, нәфрәт тойғоһо менән йәшәй. Мөхәббәт юҡлығы арҡаһында шулай килеп сыға. Был кешеләр үҙен уратып алыусыларға кире йоғонто яһай. Ундайҙар, башҡаларҙы һәләтһеҙ, йүнһеҙ итеп тойорға мәжбүр итеү өсөн әсе көләп, кешеләрҙе мыҫҡыл итеү һәләтенә эйә.

Башҡаларға кире тәьҫир итеүсе кешеләр аңлы рәүештә һөйөүгә, аңлашыуға һәм дәртләндереүгә ҡаршылыҡ тыуҙыра. Улар, үҙ һүҙҙәренең емергес тәьҫиренә әһәмиәт бирмәйенсә, телдәренә ни килә, шуны һөйләй. Үҙҙәренең яуызлығын улар, "конструктив тәнҡит", "объектив баһа" тип атап, аҡлай. Улар кешенең кәмселеген, йомшаҡлығын эләктереп алырға ғына тора. Хатта үҫемлектәр ҙә, маҡтап, иркәләп һөйләшһәң, күтәрелеп үҫеп китә, күпереп сәскә ата, ә әрләһәң, яй үҫә, хатта һулып та ҡуя бит.

Мөхәббәттең ыңғай көсө тормоштағы уңышыңды билдәләй. Мөхәббәт - ул яҡындарыңа уңышҡа өлгәшергә ярҙам итеү сараһы ла. Ул кешегә үҙ урынын һәм һәләтлелеген тойоу мөмкинлеге бирә белеүҙә сағыла. Кешелә үҙенә ҡарата ышаныс уятып, ыңғай сифаттарын билдәләп, һин уны үҙендәге сикһеҙ ҡеүәтте тормошҡа ашырырға дәртләндерәһең.

Ләкин башҡаларға ярҙам - бер яҡҡа табан хәрәкәт итеүсе урам түгел. Кешеләрҙе дәртләндереп һәм уларҙың көслө сифаттарына күрһәтеп, һин үҙеңә лә ярҙам итәһең. Һәр ыңғай ғәмәл тағы ла ыңғайыраҡ реакция тыуҙыра һәм үҙ-үҙеңә ышанысыңды нығыта.

Аңлы һөйөү барыһын да еңә. Ул еңә алмаған ҡыйынлыҡ, дауалай алмаған ауырыу, аса алмаған ишек, кисерә алмаған ғәйеп, емерә алмаған стена, йолоп ҡала алмаған гонаһ юҡ, тигән бер аҡыл эйәһе. Һөйөү кешене иң юғары баҫҡысҡа күтәрә. Һиңә шунда булырға кәрәк тә.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

## Аҡыл һәм күркәмлек

Хәлифә Һарун әр-Рәшиттең бер ҡара йөҙлө хәйерһеҙ йәриәһе булған, ти. Берҙән-бер көндө хәлифә йәриәләренә аҡса һибә. Уларҙың һәр ҡайһыһы әлеге аҡсаларҙы йыйырға тотона, мәгәр ҡара йөҙлө йәриәһе генә урынынан ҡуҙғалмайынса, Һарун әр-Рәшиттең йөҙөнә бағып тора икән. Ул йәриәнән: "Ни өсөн мин һипкән аҡсаларҙы йыймайһың?" - тип һорағас, уныһы: "Был йәриәләрҙең маҡсаттары фәҡәт аҡса алыу, минең маҡсатым иһә аҡса түгел, ә һинең ризалығың", - тип яуаплай. Һарун әр-Рәшит бик ҡәнәғәт ҡала һәм ҡара йөҙлө ҡатынды үҙенә яҡынайтып, мөхәббәтле ҡыла.

Хәлифә бер ҡара йәриәгә ғашиҡ булған, имеш, тигән хәбәр тирә-яҡтағы әмирҙәргә ишетелә. Үҙе тураһында хәбәр таралыуын белгәс, Һарун әр-Рәшит әлеге ҡатынды аҡылы өсөн йәриә итеүен белгертеү маҡсатында әмирҙәрен мәжлескә йыя. Барсаһы килеп, мәжлескә ултырғас, хәлифә йәриәләренең һәр ҡайһыһының ҡулына затлы һауыт бирҙерә һәм: "Ә хәҙер һәр ҡайһығыҙ ҡулығыҙҙағы һауыттарығыҙҙы ватығыҙ", - тип бойора. Йәриәләрҙең һис береһе һауыттарын ватмай, мәгәр ҡара йөҙлө йәриә генә үҙ һауытын онтап, селпәрәмә килтерә, ти. Бынан һуң Һарун әр-Рәшит йәриәгә ҡарап: "Һин ни өсөн һауытыңды ваттың?", - тип һорай. Йәриә иһә: "Әй, солтаным, ҡулыбыҙға затлы һауыт биреп, ватығыҙ тип әмер бирҙең. Әгәр ватһам - хазинаға зарар, ватмаһам - хәлифәгә зарар, сөнки әмере үтәлмәгән булыр, тинем. Һеҙгә зарар итеүҙән хазинаға зарар итеүҙе артыҡ күрҙем. Затлы һауытты ватыуҙан минең үҙемә ахмаҡлыҡ килә, ватмаған хәлдә - хәлифәгә гонаһ буласаҡ. Үҙемә ахмаҡлыҡты алыу хәлифәне гонаһҡа батырыуҙан, уның әмере буш китеүҙән күпкә яҡшыраҡ, тинем", - тип яуаплай. Мәжлестә булған әмирҙәр һәм бүтән халыҡ был йәриәнең эш-ҡылығын һәм һүҙҙәрен яҡшы баһалап: "Хәлифәнең был ҡара йөҙлө йәриәне һөйөүе тик сауап ҡына", - тип һығымта яһай. Әҙәм балаларына ярау төҫтөң матурлығы менән түгел, ә күркәм аҡыл һәм ихласлыҡ менән, имеш.

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 7-се һанда).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҠАТЫН-ҠЫҘ - УЛ ҺӘР САҠ БУЛА БӨЙӨК, ГҮЗӘЛ ҺЫНҒА ҠАЛАМ БАШЫМ ЭЙЕП




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**9-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Анаэроб. Артек. Табип. Әшнә. Нептун. Хамматов. Әмәл. Лье. Вымпел. Инйәр. Уймаҡ. Иҙриси. Хат. Клуб. Ватандаш. Ниәт. Мә. Алап. Лайм. Ырыу. Ат.

**Вертикаль буйынса:** Хәкимов. Әхмәтйәнов. Рәхәт. Тәртип. Аласыҡ. Урт. Асанбаев. Ай. Амплуа. Пенал. Лүшә. Бикчәнтәев. Ибраһимов. Мәргән. Талип. Нәсел. Игәт.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 март "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

**12 март "Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс. 16+

**13 март "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+

**14 март "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**8 март "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00 0+

**10 март "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим), үлемһеҙлек хаҡында хикәйәт. 15.00 12+

**11 март "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айтматов), хикмәт. 12+

**13 март "Р"-һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 12.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**8 март "Муха-Цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+

**13 март "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 14.00, 16.00 0+

**14 март "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен) 12.00, 14.00, 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**8 март Рәфис Сирусиндың концерты.** 18.00 6+

**12 март "Классика над Белой рекой"** фестиваленең йомғаҡ концерты. 6+

**13 март "Музыку слушаем вместе"** 11.00 0+

**14 март "Weekend с органом"** (Э. Хәйретдинова). 15.00 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**11-12 март Премьера! "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р.Шарт), комедия. 16+

**13 март "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+

**14 март "Краски мира в песнях и танцах"** филармония солистары. 0+

## Сибай театр-концерт берекмәһе

**"Донъя матур, донъя шундай матур"** концерт программаһы менән

**10 март -** Үрге Тәтешле,

**11 март** - Иҫке Күрҙем,

**12 март** - Иҫке Балтас ауылдары сәхнәләрендә. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Март (Рәжәб - Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (24) дүшәмбе | 6:20 | 7:50 | 13:30 | 17:34 | 19:04 | 20:34 |
| 9 (25) шишәмбе | 6:18 | 7:48 | 13:30 | 17:36 | 19:06 | 20:36 |
| 10 (26) шаршамбы | 6:15 | 7:45 | 13:30 | 17:38 | 19:08 | 20:38 |
| 11 (27) кесе йома | 6:13 | 7:43 | 13:30 | 17:40 | 19:10 | 20:40 |
| 12 (28) йома | 6:10 | 7:40 | 13:30 | 17:42 | 19:12 | 20:42 |
| 13 (29) шәмбе | 6:08 | 7:38 | 13:30 | 17:44 | 19:14 | 20:44 |
| 14 (1) йәкшәмбе | 6:05 | 7:35 | 13:30 | 17:46 | 19:16 | 20:46 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ*

## АЙЫРЫЛМАҒЫҘ...

Рәсәйҙә айырылышҡан парҙарға никахты тарҡатыу тураһында таныҡлыҡ биреү туҡтатыла. Документ һанлы форматта була, тип хәбәр итте федераль киң мәғлүмәт саралары Федераль һалым хеҙмәте башлығы Даниил Егоровҡа һылтанма менән.

Унең һүҙҙәренсә, 1926 йылдан башлап ҡағыҙҙа яҙылған барлыҡ гражданлыҡ хәле акттары һанлы форматҡа күсерелә. Артабан ҡағыҙ бланктарҙың ҡайһы бер төрҙәренән бөтөнләй баш тартырға йыйыналар. Ләкин сарала тантаналыҡты һаҡлау өсөн никах теркәү тураһындағы ҡағыҙ таныҡлыҡты тапшырыу дауам итә. Росстат мәғлүмәттәре буйынса, былтыр ғинуарҙан алып сентябргә тиклем Башҡортостанда 10 315 ғаилә тарҡалған, 14 853 пар өйләнешкән.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө районы** Шамонино ауылынан Әлфиә Шарапова, Римма Сафуанова, Миңзәлә Ғәйнуллина, Гөлнара Латыпова, Гөлнара Мөрсәлимова, **Көйөргәҙе районы** Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Сурин, **Ишембай районы** Аҙнай ауылынан Миңлеғәли Кинйәбулатов, **Мәләүез районы** Смаҡ ауылынан Гөлсөм Хисаметдинова, **Өфө ҡалаһынан** Зөлфиә Юлбирҙина, **Сибай ҡалаһынан** Нәсимә Ғиззәтуллина, Илгизә Зәйнуллина, Рәил Мәхийәнов, Гөлсимә Мөхәмәтдинова, Дмитрий Шәрәфиев, Юлиә Йәнтурина, Эльза Юлдыбаева, Вәкил Йосопов һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла ныҡлы һаулыҡ, бай бәхетле оҙон ғүмер, эштәрегеҙҙә уңыштар, яҡшы уй-ниәттәрегеҙҙең тормошҡа ашыуын, ҡыуаныс-шатлыҡтар, күңел тыныслығы, рух ныҡлығы теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*ШАҒИР ҺҮҘЕ*

# НАҘҒА ХАҠЛЫМЫН

*Бесән сабам.*
*Ергә ныҡлы баҫып,*
*Ҡолас ташлап, һелтәп салғымды.*
*Рәхәтләнеп бесән сапҡан саҡта*
*Онотамын бөтә ҡайғымды.*

*Мин - ҡатын-ҡыҙ.*
*Бәлки, килешмәйҙер,*
*Ирҙәр менән йәнәш ярышыу.*
*Тормош һынауҙарын инҡар итеп,*
*Буран-елдәренә ҡарышыу.*

*Нәзәкәтле, наҙлы ҡатын-ҡыҙға*
*Кемдәр генә шиғыр яҙмаған?*
*"Ҡатын-ҡыҙҙың көсө - көсһеҙлектә",-*
*Кемдер хатта уйлап сығарған.*

*Көсһеҙ, нескә, яҡлау-наҙға мохтаж*
*Минең дә бит килә булаһым,*
*Мөхәббәт һәм бәхет гөлдәренә*
*Күбәләктәй осоп ҡунаһым.*

*Мин - ҡатын-ҡыҙ.*
*Наҙлы, хисле булыу*
*Ҡатын-ҡыҙға бигерәк килешә.*
*…Мин яратам йөктө һөйрәшергә*
*Ирем менән бергә, йәнәшә.*

*Ер ҡаҙырға, утын әҙерләргә,*
*Өй төҙөргә, бесән сабырға.*
*Иңгә-иң терәшеп йәнәш булһаң,*
*Донъя йөгөн еңел тартырға.*

*Кәрәк булһа - наҙлы, хисле булам,*
*Кәрәк булһа - көслө, ныҡлы мин.*
*Ирем менән дәрәжәм бер икән -*
*Хөрмәткә һәм наҙға хаҡлы мин.*

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# АЛҒА, ГҮЗӘЛ ЗАТТАР!



**Кешелек донъя календарында XXI быуаттың 21-се йылы тип билдәләнгән ваҡыт даръяһында көн итә әлеге мәлдә. Әммә быға тиклем ул күпме заманалар аша үткәндер - быны хатта ғалим-ғөләмә лә яҡынса ғына билдәләй алмай.**

Әммә кешелек тарихы башланған тәү дәүерҙәрҙән үк ул бер-береһенән һис бер айырыла алмаған ике төркөмдән - ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙан хасил булған. Бөйөк Йыһани Зат, йәғни Аллаһы Тәғәлә Әҙәм үә Һауаны, шулай уҡ уларҙан таралып киткән барса кешеләрҙе ошолай, ике яртынан бер бөтөн булырлыҡ итеп яралтҡан. Улай булмаһа, йәндәребеҙ өсөн бөтмәҫлек энергия сығанағы булған мөхәббәт тигән оло хис-кисереш тә беҙгә ят булыр ине. Ерҙәге тормошто башҡаса күҙ алдына ла килтереп булмай.

Йәнә, үтә боронғо замандарҙа кешелек йәмғиәтенең, цивилизацияның матриархат тип аталған осоро ла булған икән. Йәғни, йәмғиәт менән ҡатын-ҡыҙҙар идара иткән дәүер була ул. Әгәр шулай булмаһа, бәлки, кешелек архаика заманынан үтеп тә сыға алмаҫ ине. Ҡайһы саҡта шулайыраҡ та уйлап ҡуямын: йәмғиәттә генә түгел, дәүләт идаралығында ла ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға бирелә торған урын бермә-бер арта барырға тейештер, тип. Беҙ, ир-ат, уларға башлыса нәфис зат, мөхәббәт объекты, ғаиләләребеҙ усағын һүндермәйенсә тотоп тора алған ир ҡатыны, балаларыбыҙ әсәһе, йә булмаһа тырыштарҙан тырыш һөнәр эйәһе итеп кенә ҡарарға күнегеп киткәнбеҙ. Шуғалыр инде, ҡатын-ҡыҙҙарҙан берәйһе юғары власть органдарына эшкә алына ҡалһа, аптырабыраҡ та, һағайыбыраҡ та ҡарайбыҙ: йәнәһе, ул ҡатын берәй эш күрһәтә алырмы икән? Ә бит сит илдәрҙә, хатта Европа һәм Америкала ғына түгел, Азия илдәрендә лә юғары власть даирәләрендә дан ҡаҙанған лидер ҡатын-ҡыҙҙар күбәйгәндән-күбәйә бара. Уйлауымса, киләсәктә Рәсәйҙә лә ҡатын-ҡыҙ Ил президенты вазифаһына һайланған хәлдә күп проблемаларыбыҙ тиҙерәк тә, еңелерәк тә хәл ителер ине кеүек миңә. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ мәктәп тупһаһынан алып вузға тиклем, үҙ йортонда ла, профессиональ өлкәлә лә күп ирҙәрҙән алдымыраҡ икәнен дә күреп-белеп торабыҙ ҙа баһа! Шулай булғас, мин яңы заманда өр-яңы бер оран-лозунгты барса илгә иғлан итер инем: "Алға, һөйөклө гүзәл заттар! Һеҙ ала алмаған бейеклектәр юҡ ул!"

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ШОҢҠАР ЮҠТА...

## ябалаҡ майҙан тотор

Арзан тауар ярлы кешенең малын бөтөрә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бөтә сәйәсмәндәр ҙә бер төрлө: улар йылға булмаған ерҙә күпер төҙөргә ант итә.

**(Н. Хрущев).**

Кешене яратырҙан алда хөкөм итергә кәрәк, ятаҡас, хөкөм итә алмаҫһың.

**(Марк Туллий Цицерон).**

Үҙҙәренең ҡоллоҡ менән кәмһетелеүен аңламаған халыҡ ҡалай йәл миңә. Тимәк, улар ҡол булыр өсөн тыуған.

**(Петр Чаадаев).**

Илһам - ул ялҡауҙарҙы урап үтеүсе ҡунаҡ.

**(Петр Чайковский).**

Ҡатын-ҡыҙ бирешмәһә - еңә, бирешһә - еңеүсегә үҙ шарттарын таға.

**(Карел Чапек).**

Бер үлтереү кешене енәйәтсе итә, йөҙәрләгән ғүмерҙе өҙөү уны батыр итә. Бөтә эш - масштабтарҙа.

**(Чарльз Чаплин).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ваҡыт сәйәхәт итеүсе дәрүиш каруанһарайҙа ял итеп китергә туҡтала, йәнәшәһендә урынлашыусы һаран сауҙагәр менән таныша. Хәбәремде тыңлай белгән кешене осраттым бит әле, тип, сауҙагәр бик шатлана һәм аҡыллы ҡартҡа хәбәрен һөйләй башлай:**

**- Мин һәр бер тәңкә аҡсаны ҡәҙерләп һаҡлайым, һәр эштең килемле булыу яғын уйлайым, бер нимәне лә бушҡа әрәм итмәҫкә тырышам. Бар ғүмерем буйы мин үҙемде йәлләмәй байлыҡ йыйҙым, ә минең алама туғандарым мине яратмай, һаран, ахмаҡ тип рәнйетеп кенә тора...**

**- О, улар хаҡлы түгелдәр... - тип йомшаҡ тауыш менән яуаплай дәрүиш.**

**- Һин ысынлап та шулай уйлайһыңмы? - ти шатланып сауҙагәр.**

**- Әлбиттә! Үҙенең туғандарын хәстәрләп, улар өсөн йәшәп, улар өсөн үҙ ауыҙынан өҙөп байлыҡ туплаған тағы ниндәй йомарт кеше бар донъяла!**

**- Нисек инде ул?.. - тип аптырап китә сауҙагәр, ҡарт һөйләгән кешенең үҙенә тап килмәгәнен аңлап.**

**- Бына шулай... - ти дәрүиш. - Килер бер көн, һинең йәнең тәнеңдән айырылыр, уға инде бер ниндәй ер байлыҡтары ла кәрәкмәҫ. Теләйһеңме-юҡмы, бар байлығың ярлы туғандарыңа күсәсәк. Нисек уйлайһың, шул ваҡыт туғандарың кемгә рәхмәт сүрәләре уҡыр: һиңәме, йә берәй ярлы ҡоҙаңамы?"**

*ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ*

# УЛАРҘЫҢ АСЫЛЫ...



Донъя ҡуласаһы ҡалай ғына әйләнмәһен, нисә быуат үтмәһен, ир кеше һунарсы булып ҡала. Ул ғаиләһен ҡарай, ашата, кейендерә, йорт һала. Әлбиттә, ир-егет хис-тойғоларға бирелеүсән түгел, ул ҡырыҫыраҡ та булырға, яҡындарына ҡарата мөхәббәтен белдереп бармаҫҡа ла мөмкин. Ә бына ҡатын-ҡыҙҙың төп бурысы - өйҙә мөхәббәт уты ҡабыҙыу, шул яратыуҙы балаларына тапшырыу. Ул өйҙө күңел йылыһы менән матурлаусы. "Киске Өфө" гәзитен уҡыған барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға тап шундай вазифа теләйем.

Әйткәндәй, ҡатын-ҡыҙ үҙ өйөндә, үҙ ғаиләһендә генә күңел йылыһын таратыусы, яҡшы мөнәсәбәттәр булдырыусы түгел. Уның был ҡөҙрәте балаларының ғаиләһенә лә етә, ул әсәй һәм ҡәйнә булараҡ та ҡот өҫтәй тормошҡа. Бигерәк тә беҙҙең башҡорт ҡәйнәләре шулай һәм шунлыҡтан да беҙҙең халыҡта "насар ҡәйнә" тигән ҡалыплашҡан образ юҡ. Ҡатыным менән тормош ҡорғас та ҡәйнәм яғынан оло ярҙам, хәстәрлек тойҙом, бөгөнгө көндә лә ул беҙҙең ғаиләнең төп терәге.

Бына шулай, беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар ниндәй йәштә, ниндәй статуста - ир ҡатыны, әсәй, ҡәйнә, өләсәй булыуҙарына ҡарамаҫтан, донъябыҙ терәге булыуҙан туҡтамай. Был - уларҙың асылы. Ошо асылынан яҙҙырмаһын Хоҙай беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙын. Байрам менән!

**Ришат САБИТОВ,**
**Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы директоры.**

*ҺҮҘ - ҮҘЕНӘ*

# РЕЖИССЕР ҘА УЛ!



Ҡатын-ҡыҙҙың режиссер булыуы - ул былай ҙа хыялый ғына заттың бөтөнләй ерҙән ысҡынып китеүе, тип шаяртып башлайым әле. Әммә һәр шаяртыуҙа бер аҙ хаҡлыҡ та бар. Режиссер булыу - ул бөтә ерҙә лә мәғәнә, эстәлек, ниндәйҙер күренеш эҙләү. Һин был халәткә шул тиклем инеп китәһең һәм ысынбарлығың да шуның эсендә тороп ҡала һымаҡ. Руль артында барғанда юл күренештәренән дә, сәй артында сынаяғың боҫонан да, кер машинаһының тәҙрәһендәге әйләнештә лә бер сюжет табырға була. Һәм һин уны табаһың да...

Эшем минең өсөн тормошомдан, ғаиләмдән айырым мөхит түгел. Улар бөтәһе бергә солғанған. Эште эштә ҡалдырып, ундағы уйҙарҙы ҡуйып китеп булһа, был режиссер ижады түгел. Ғөмүмән, ижадсы шөғөлө лә, хеҙмәте лә түгел. Был бер үк ваҡытта бәхет тә, шул уҡ ваҡытта ҡотолоп булмай торған ыҙа ла. Йәғни, михнәтле ижад рәхәте. Ҡатын-ҡыҙ ижадсы ул тәрәнерәк тойоусы, яҡшыраҡ һиҙеүсе, күберәк ишетеүсе, нығыраҡ тойоусы, тиҙерәк аңлаусы, хислерәк итеп килтереп сығарыусы. Сөнки, ул - ҡатын-ҡыҙ!

**Сулпан АСҠАРОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған артисы,**
**режиссер.**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21010

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
5 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 166/03